ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

29-4 июль - август (майай - урағай)

2023

№29 (1071)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

*Иғтибар!* ***Хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ, әйләнә-тирәгеҙҙә гәзитебеҙгә яҙылып өлгөрмәй ҡалғандар булһа, әйтегеҙ: улар 15 августа тиклем яҙылып, сентябрҙән алдыра башлай ала - 4 айға яҙылыу хаҡы 532 һум 40 тин. Шулай уҡ ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә 2024 йылдың тәүге яртыһына ваҡытынан алда 771 һум 12 тингә яҙылырға мөмкин.***
***Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Самауыр Туланыҡымы,**
**әллә Ҡытайҙыҡымы?**



6

**Һүҙенән көсө булһын,**
**уны кире уйҙар менән бысратма!**



8-9

**Ышанмағыҙ беҙгә, ауылдар...**



9,11

**Хәтеребеҙгә...**
**заман балтаһы яҫҡынмаһын**



12-13

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ГҮЗӘЛ ӨФӨБӨҘГӘ...

## иҫ киткес шәп муйынсаҡ!



**Өфө кеүек ҙур мегаполистарҙа йәшәүселәр әүҙем ял итә алыу урындарына мохтажлыҡ кисерә. Әлбиттә, Өфөлә элек-электән парктар күп булды, әммә күпселек халыҡ уларҙан ситтәрәк йәшәгәс, тәбиғәт ҡосағында ял итер өсөн йәмәғәт транспортына ултырып барырға тура килә ине.**

Мин үҙем ғаиләм менән 1994 йылдан бирле Һупайлы биҫтәһендә йәшәйем, Ҡариҙел (Өфө) йылғаһы буйында. Әммә 90-сы йылдарҙа яр буйында таш ҡатыш ҡомдан хасил булған тар ғына юл шәрәмәтенән (уныһы ла соҡор-саҡырлы, бысраҡ күләүекле) башҡа иркенләп йөрөп була торған һуҡмаҡ булманы. Ҡариҙел йылғаһы буйлап Һупайлының бер осонан икенсеһенә тиклем бетон дамба төҙөлөп, ял итеүселәргә бер юлы ике йәйәү һәм велосипедта йөрөп була торған юлдар асылғас, барса халыҡ ихлас шатланды. Ошо һуҡмаҡтарҙан һупайлылар йыл әйләнәһенә, көн оҙонона йөрөүҙән туҡтағаны юҡ хәҙер. Ул ғына ла түгел, етәкселәребеҙ элек ташландыҡ хәленә еткән Ҡашҡаҙан паркын, Рәсәй кимәлендә лә маҡтанырлыҡ итеп яңыртҡас, халыҡтың нисек ҡыуанғанын күрһәгеҙ ине!

Былар барыһы ла маҡтауға лайыҡ. Һәм бына тағы ла бер яңылыҡ: баш ҡалабыҙҙа "Өфө муйынсағы" тип аталған "Территориялар үҫеше үҙәге" бик файҙалы эш башлаған. Был - йәмәғәт ойошмаһы, ул Өфөнөң 6 районында йәйәү һәм велосипедта йөрөү өсөн маршруттар булдырып, уны кешеләр өсөн һәр яҡтан уңайлы итеп ҡороу маҡсатын ҡуя. 6 кешенән торған команда: Әнүәр Байков, Адель Әхмәҙуллина, Фәрит Абдуллин, Семен Кучеров, Юрий Глущенко, Святослав Мурунов "Өфө муйынсағы" тип аталған оригиналь проект эшләй. Төп маҡсат - Өфө "ярымутрауы" сиктәренең 4 тарафында әлегә тиклем булған һәм өр-яңынан төҙөләсәк 8 йәйәү һәм велосипедта йөрөү маршруттарын, образлы итеп әйткәндә, юл-һуҡмаҡ мәрйендәрен бер епкә теҙеп, ҡала тирәләй муйынсаҡ-ҡуласа булдырыу. Проектты ғәмәлгә ашырыусылар иң элгәре Өфө ҡалаһында йәшәүселәргә ял итеү өсөн уңайлы, экологик яҡтан таҙа, шул уҡ ваҡытта мәғлүмәти һәм зауыҡлы мөхит булдырырға теләй. "Һәр бер Өфө кешеһенә тәбиғәт ҡосағында ял итер, йәйәү йә иһә велосипедта йөрөп килер, физик күнекмәләр эшләр өсөн 15 минут эсендә барып етерлек шарттар булдырырға кәрәк", - тиҙәр проект авторҙары. Шулай уҡ экологик саралар, төрлө уйындар, ярыштар, кросс кеүек спорт сараларын уҙғарыу өсөн уңайлы мөхит барлыҡҡа киләсәк. Ошо проектты ғәмәлгә ашырыу өсөн Өфө ландшафтын тикшереп, кәрәк булған урындарҙа яңы юл-һуҡмаҡтар һалыу зарур. Ағиҙел, Ҡариҙел, Дим йылғалары ярҙарында шундай матур тәбиғәт зоналары бар, уларҙа тирә-яҡты күҙәтер, бағып һоҡланыр өсөн махсус майҙансыҡтар булдырыу күҙаллана.

**(Дауамы 2-се биттә).**

АФАРИН!

# ЕҢЕҮҘӘР ӨСӨН ТЫУҒАН!

**Республика инженер лицей-интернаты уҡыусыһы Вадим Харисов Швейцарияла уҙған 55-се Халыҡ-ара химия олимпиадаһында алтын миҙал яуланы һәм донъяның 90 иленән килгән конкуренттарынан көслөрәк булып сыҡты.**

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров үҙенең телеграм-каналында Вадимды ҡотлап, шулай тине: "Беҙҙең командаға шундай башлы егеттәр кәрәк. Вадим Республика инженер лицей-интернатында уҡый. Әйткәндәй, быйыл майҙа ул Ҡаҙағстанда химия буйынса Менделеев олимпиадаһында еңеү яулағайны. Ә хәҙер яңы еңеү - ниндәй бит әле! Вадим Харисовты, уның остазын, химия буйынса баш тренер Айнур Ғүмәровты ошондай юғары һөҙөмтәгә өлгәшеүҙәре менән ҡотлайым. Беҙҙең, Башҡортостан, Рәсәй мәктәбе - ысынлап та донъяла иң көслөләрҙең береһе. Ә беҙҙең йәштәр - иң һәләтлеһе. Быға бер ваҡытта ла шигем булманы".

Әйткәндәй, Рәсәйҙең йыйылма командаһы Халыҡ-ара химия олимпиадаһында бөтәһе өс алтын һәм бер көмөш миҙалға лайыҡ булды. Уның составына Вадимдан башҡа химия фәненән Бөтә Рәсәй мәктәп уҡыусылары олимпиадаһы еңеүселәре инде.



12+

@KISKEUFA
Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!
смартфон камераһын төбә

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ГҮЗӘЛ ӨФӨБӨҘГӘ...

## иҫ киткес шәп муйынсаҡ!

(Башы 1-се биттә).




Ирекмәндәр ошо башланғыс менән Өфө ҡалаһы хакимиәтенә мөрәжәғәт итә һәм тулыһынса хуплау таба. Ул ғына ла түгел, проект республика кимәлендә лә перспективалы тип табылып, Башҡортостан Республикаһы Башлығы грантына лайыҡ була. Ирекмәндәр проект буйынса әүҙем эш башлай. 1921 йылдың апреленән октябрь айына тиклем проектта ҡатнашыусылар Өфө ҡалаһы хакимиәте хеҙмәткәрҙәре менән берлектә Өфө ярымутрауы сиктәрен тикшереп сығып, халыҡ файҙаланған маршруттарҙы теркәп, 30-ҙан артыҡ gps-тректы бер файлға туплай. Шулай итеп, "Өфө муйынсағы"ның виртуаль нигеҙе хасил була.

Ошо көндәрҙә БР Башлығы Радий Хәбиров "Өфө муйынсағы" проектының буйомға ашырылыуы менән танышыу өсөн уның яңыраҡ төҙәкләндерелгән бер өлөшөн ҡарап сыкты. "Башҡортостандың баш ҡалаһында "Өфө муйынсағы" проектының нисек ғәмәлгә ашырылыуын ҡараным. Оҡшаны, бик тә маҡтауға лайыҡ. Был - Өфөнөң 6 районы территорияһында Өфө ярымутрауының ярҙары буйлап урынлашҡан парк комплекстәре селтәре. Улар бер-береһе менән, муйынсаҡ мәрйендәре кеүек, йәйәү йөрөй торған һуҡмаҡтар менән тоташҡан. Ҡала ошо территорияларҙы әкренләп төҙөкләндерә. Артабан беҙ ҙә мөмкин булғанса был эштә ярҙам итәсәкбеҙ", - тине республика етәксеһе.

Ҡала хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев үҙенең телеграм-каналындағы сәхифәһендә ағымдағы йылда проект буйынса ниҙәр эшләнәсәге хаҡында мәғлүмәт бирҙе. Былтыр проект буйынса 7 саҡрым юл-һуҡмаҡ һалынған. Быйыл йыл аҙағына тиклем маршруттың 14 км арауығы төҙөкләндереләсәк: Калинин исемендәге паркта, Сипайловонан "Олимпик-парк"ка тиклемге һәм Перинаталь үҙәгенән "Президент отель" ҡунаҡханаһы артындағы байҡама майҙансығына тиклемге участкаларҙа планлаштырылған эштәр башҡарыласаҡ. "Төп маҡсат - максималь комфортлы шарттар булдырыу: йәйәү һәм велосипедта йөрөү өсөн тигеҙ юлдар һалыу, яҡтыртыу, эскәмйәләр ҡуйыу, уйын һәм байҡама майҙансыҡтарын төҙөү. Бер үк ваҡытта һәр кемгә - тәбиғәт менән гармониялы берләшеү мөмкинлеге", - ти ҡала етәксеһе.

Әйтергә кәрәк, һуңғы йылдарҙа баш ҡалабыҙҙа бихисап төҙөкләндереү эштәре башҡарылды, ял итеү өсөн комфортлы, бик тә унайлы булған зоналар артҡандан-арта бара. Өфө күҙгә күренеп күркәмләнә бара бит! Был осраҡта республика һәм ҡала етәкселәренә лә, ошондай мөһим төҙөкләндереү эштәрен үҙ ҡулдары менән ғәмәлгә ашырыусыларға ла рәхмәт белдереп, үҙебеҙгә лә ошо матур мөхитте бысратмайынса, яңы төҙөлгән объекттарҙы һаҡсыл рәүештә файҙаланырға ғына ҡала.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

БЫЛ АЙҘА...

# УРАҒАЙ - ЙӘЙ АХЫРЫ



**Урағай килеп еткән дәһә! Шау-шыулы, ығы-зығылы, ҡайғы-хәсрәтле, ҡырҡ хәстәрле көндәр, йәйге мәшәҡәттәр араһында илгә баш икмәк барын да иҫкә төшөрҙә ауғыс...**

Хәйер, шөғөлө игенселек булған изге һөнәр эйәләре күптән баҫыуҙа: июль урталарына Стәрлетамаҡ, Ейәнсура, Ауырғазы, Дәүләкән, Илеш, Ҡырмыҫҡалы, Мәләүез баҫыуҙарының төүге мең гектарында уңыш культуралары йыйылған һәм ике мең тонна иген һуғып алынған ине инде. Сәсеүгә иртә төшөү һәм үткән айҙың эҫе көндәре уракты ла ҡыҙыулатты. "Урып-йыйыу быйыл 10 көнләп алдараҡ башланды...Быйыл беҙҙә 1 млн 760 гектарҙа иген һәм ҡуҙаҡлы культуралар йыйып алыу бурысы тора," - тип яҙҙы үҙенең сәхифәһендә республика Башлығы Радий Хәбиров һәм игенселәргә эштәрендә уңыштар теләне. Көндәр унай, имен генә торһа, урағай "агайға" ла эш ҡалмаҫ әле, ҡалған уңыш тиҙерәк һәм исрафланмай ғына иген бураларына инеп ятһын, тип теләйек.

Халыҡ һынамышы буйынса, августа ураҡ ҡыҙа, һыу һыуына, шуға ла был осорҙағы һауа торошо ҡыҙыҡһындыралыр. Һәр ваҡыттағыса, был айға ла хор менән төрлө сығанаҡтарҙан төрлө хәбәрҙәр яуа: берәүҙәр, ифрат эҫе, томра буласаҡ, тип хәүефләндерә, сөнки урағай былай ҙа йыл календарының иң ҡыҙыу мәле. Бәғзе берәүҙәр эҫе менән һыуыҡ атмосфера ағымы сиратлашып, ҡапыл һыуыта, ел-дауыл көсәйә, тип тә юрай. Быйдай "белемсе"ләр тараҡҡан имеш-мимештәргә ҡарата Рәсәй Фәндәр академияһының Биогеография институты белгесе Аркадий Тишков үҙ фекерен белдерҙе. Августа һауа торошонда бер ниндәй ҙә ғәҙәттән тыш күренештәр көтөлмәй, тине ул. Йәйҙең төүге яртыһында Краснодар крайы, Ҡырым, Сочи һәм Анапалағы ҡойма ямғыр, һыу баҫыуҙар туҡталып, августа тыныс, "бәрхәт сезон" башланасаҡ, тип вәғәҙәләй (әллә был айҙа отпуск алыусыларҙы көньяҡ курорттарға өндәйме?), тик бына "Күктәр көнсәләре"нең үҙ ниәттәре, уныһы хатта Тишков әфәндегә лә билдәһеҙ. Ә инде Башгидрометүҙәктең бынан бер ай элекке мәғлүмәттәре буйынса Башҡортостанда августың төүге аҙнаһы плюс 30-31, ә ҡалған көндәрендә уртаса айлыҡ һауа температураһы плюс 19-21 градус, яуым-төшөмдөң нормаға яҡын булыуы күҙаллана. Һуңғы йылдарҙа климаттың сығырынан сығыуы һәм уның кешелеккә нимә менән янауы хәҙер инде бер кемгә лә: ябай кешенән алып, ғалимдарға тиклем дә сер түгел. Планетабыҙ температураһы ҡыҙғандан-ҡыҙа бара. Европа илдәре +45 градусҡа күнекте лә ул, тик бына киләсәккә фәнни күҙаллауҙар буйынса тиҙҙән ул 50 градус тәшкил итәсәк! Ҡытайҙа - 52, Төньяҡ Америкала, Калифорния менән Невада сиктәрендә термометр бағанаһы 53-тө күрһәтә.

Бындай хәлдең сәбәптәре лә кешелек донъяһына яҡшы билдәле: парник газдарының, иң беренсе углекислый газдың (CO2) юғары тупланышы атмосферала йылылыҡты тотоп тора, шунлыҡтан һауа температураһы күтәрелә. Бынан 7-8 йыл элек кенә әле углекислый газ тупланышы 400 ppm (part per million - миллионынсы өлөш; атмосфераның бысраныуын үлсәү берәмеге) сигенә килеп етһә, хәҙер - ул 420! Ғалимдар фекеренсә, был рекорд күрһәткес. 2016 йылда һауа атмосфераһында CO2 тупланышын кәметеү буйынса саралар хаҡында 200 ил тарафынан ҡул ҡуйылған Париж килешеүе үтәлмәй, дөрөҫөрәге, ул бөтөнләй онотолдо. Улай ғына ла түгел, 2017 йылда АҠШ был килешеүҙән сығыуы хаҡында рәсми рәүештә белдерҙе һәм ундағы шарттарҙы үтәүҙән баш тартты.

Хәйер, Америка власТарының башында бөгөн ниндәй углекислый газ ҡайғыһы булһын, ти? Таҙа экологияға аҡса йәл

Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Ил Президенты Владимир Путин хәрби дәрәжәһе булған граждандар өсөн запаста булыуҙың сикке йәшен биш йылға арттырыу тураһындағы законға ҡул ҡуйҙы. Шулай итеп, беренсе разрядлы хәрби бурыслыларға сикке йәш - 35-тән 40 йәшкә, икенсе разрядлыларға - 45-тән 50 йәшкә, өсөнсө разрядлыларға 50-нән 55 йәшкә тиклем күтәрелә. Өлкән офицерҙар өсөн мобилизация резервында булыуҙың сикке йәше - 65 йәшкә, кесе офицерҙар өсөн 60 йәшкә тиклем арттырылды.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республиканың енәйәтбашҡарыу системаһы етәксеһе Владислав Дзюба менән осрашты. Көн тәртибендә - хөкөм ителгәндәр өсөн холоҡ төҙәтеү үҙәктәренең эшен ойоштороу, Федераль яза башҡарыу хеҙмәте учреждениеларының етештереү секторын киңәйтеү, Федераль яза башҡарыу хеҙмәтенең республика идаралығы предприятиеларында тауарҙар сығарыу һәм хеҙмәттәр күрһәтеү күләмен арттырыу. Был сараларҙың төп бурысы - хөкөм ителгәндәрҙән хеҙмәт мәшғүллеген тәьмин итеү, яңы һөнәрҙәргә өйрәтеү, шулай уҡ азат ителгәндән һуң уларҙы эшкә урынлаштырыу өсөн шарттар булдырыу.

✓Башҡортостан Хөкүмәтендә үткән кәңәшмәлә республикала торлаҡ төҙөлөшө үҫешен тикшерҙеләр, тип хәбәр итә Башҡортостан Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәте. Билдәләнеүенсә, 2023 йылдың төүге яртыйыллығы йомғаҡтары буйынса Башҡортостан торлаҡ төҙөү буйынса Рәсәйҙә - һигеҙенсе, Волга буйы федераль округында икенсе урынды биләй. Былтыр республика торлаҡты сафҡа индереүҙең рекордлы кимәленә еткән - 3 миллион квадрат метр.

✓Башҡортостанда мәктәп директорҙарының эшен һөҙөмтәлелек критерийҙары буйынса баһалайҙар. Республика Мәғариф министрлығының бойороғона ярашлы, һөҙөмтәлелекте баһалау критерийҙарына дәүләт заданиеһын үтәү, электрон һәм дистанцион уҡытыуҙы ҡулланып, белем биреү программаларын тормошҡа ашырыу, уҡыусыларҙың ҡәнәғәт булыу-булмауы, яңы программалар индереү, финанс-хужалыҡ дисциплинаһын үтәү, белем биреү сифатын баһалау һәм башҡалар индерелгән.

✔ *Рухты дауалауҙың иң һөҙөмтәле ысулы - матур шиғыр уҡып алыу, әлбиттә. Бына Рәми Ғариповтың "Диңгеҙ һәм сабый" шиғыры. Уны әлеге ҡатмарлы заманға оҡшатам һәм аҙ һанлы милләттәргә арналған һымаҡ ҡабул итәм.*



булһа ла, ҡоралланыуға граждандарының һалым аҡсаһын мул тотона Пентагон: быйылға оборона маҡсаттарға 858 млрд доллар самаһы һалынған. 2019 йылда был ил Уртаса һәм бәләкәй арағаа ядро ҡоралын юҡ итеү хаҡындағы килешеүҙән дә тайыу яғын ҡараны. Ә инде былтыр АҠШ-тың ядро ҡоралына ғына тотонолған сығымдары (43,7 млрд доллар) Рәсәйҙекенә (9 ,6 млрд доллар) ҡарағанда - 5, ә Ҡытайҙыҡынан (11,7 млрд доллар) 4 тапҡырға күберәк, тик шулай ҙа ядро ҡоралы менән янауҙарҙың Вашингтондың тап үҙенән килеүен был ил танырға теләмәй, ә уны бер тапҡыр ҙа ҡулланып ҡарамаған илдәргә туҡтауһыҙ шик белдерә һәм стена аша көнө-төнө "бүре" күрә.

Шул уҡ ваҡытта 2022 йылдың мартында ҡабул ителгән АҠШ-тың ядро доктринаһынан ядро ҡоралын беренсе булып ҡулланмау хаҡындағы пункт алып ташланды. Тимәк, "беренселек" сире бында ла мөһим урар өсөн? Пентагон бөгөн бөтөн төр массовый юҡ итеү ҡоралдарын тамырынан яңыртыу һәм камиллаштырыу ниәте менән яна, өҫтәүенә, 659 яңы ракета һатып алырға йыйына, шуларҙың 25-ен - һынап ҡарау маҡсатында. Бына шулай, АҠШ үҙенең донъя тарихында беренсе булып иң ҡанһыҙ, иң кешелекһеҙ, иң хурлыҡлы ғәмәл ҡылыуын бик тиҙ онотто. 1945 йылдың **6** һәм **9** август көндәрендә Рәсәй кешелекте фашизм ҡоллоғонан ҡотҡарып, Бөйөк Еңеү тантанаһы кисергән осорҙа, бынан 78 йыл элек, АҠШ Японияның Хиросима һәм Нагасаки ҡалаларын атом бомбаһына тота. Японияға ҡаршы һуғышта был дошмандан үс алыу ғына түгел, ә яңы төр үлемесле ҡоралды һынап ҡарау ҙа була. Был ҡалалар минут эсендә көлгә әйләнеп, ер менән тигеҙләнә, 200 меңләп кеше тамуҡ утында тереләй яна, иҫән ҡалғандары радиациянан нурланып, яман сирҙәргә тарып, ғүмерлек ғазаптарға дусар итеlә, ғәрип, сирле сабыйҙар тыуа...Кешелек бөгөн әле булһа АҠШ властарының һәм атом ҡоралын ҡулланыуға бойороҡ биргән ул ваҡыттағы президент Гарри Трумэндың ҡот осҡос был хәрби енәйәте өсөн халыҡ-ара судҡа бирелмәүен һәм бер ниндәй язаһыҙ ҡалыуын аңлай алмайынса ғәжәп ҡыла.

Ләкин Япония ла ул йылдарҙа "ап-аҡ ҡына йомшаҡҡай" булмай: Ҡытайҙың Нанкин ҡалаһында массовый һуйыш ойоштороуы менән атом ҡорбандарына ҡарағанда ла күберәк ҡырылыш килтереүсе ил була ул. Күрәһең, шуға ла япондар бөгөн был фажиғәләр хаҡында әллә ни иҫкә алмауҙы хәйерлерәк күрә. Бына шулай яҙаһыҙлыҡ ҡабат-ҡабат ҡылыныр яуызлыҡҡа юл аса ла инде. Ваҡытында фашистик Германия енәйәтселәре өҫтөнән ғәҙел акт - Нюрнберг судына тарттырыуға торошло халыҡара трибунал АҠШ-тың ҡоралланыу "комарын" байтаҡ йылдарға баҫырып ҡуйырға булышлыҡ итер ине лә бит. Ядро ҡоралын тыйыу өсөн Бөтөн донъя көрәш - Хиросима көнө (**6 август**) күбеһенсә, шулай итеп, донъя календарында ғына иҫкә алына бөгөн.

Урағайҙа билдәләнә торған иҫтәлекле һәм һөнәри көндәр: РФ Ҡоралы Көстәренең Тыл көнө; БАССР-ҙа Радио хәбәр итеүҙәре башланған көнгә - 95 йыл **(1)**, Һауа-десант ғәскәрҙәре **(2)**, Светофор **(5)**, Тимер юлсылар; Хиросима көнө. Ядро ҡоралын тыйыу өсөн Бөтөн донъя көрәш; Табиптар - тыныслыҡ өсөн **(6)** көндәре, Донъяның халыҡ-ара төп халыҡтары көнө **(9)**, Рәсәйҙең Хәрби-һауа көстәре, Физкультурниктар, шулай уҡ Халыҡ-ара йәштәр **(12)** көндәре, БР Умартасылар, Төҙөүселәр, Бөтөн донъя һулаҡайҙар **(13)**, Археологтар **(15)**, Бөтөн донъя гуманитар ярҙам, Берәҙәк хайуандар **(19)**, Рәсәй Һауа флоты **(20)**, РФ Дәүләт флагы **(22)**, Рәсәй киноһы, Шахтер **(27)** көндәре, Рәсәй Ҡоралы Көстәренең махсус тәғәйенләнеш подразделениеһы, Халыҡ-ара ядро һынауҙарына ҡаршы ғәмәлдәр **(29)** көндәре.

**Урағайҙа тыуғандар:**

**1 -** педагог, ғалим-психолог, психология фәндәре кандидаты, педагогия фәндәре докторы, БДПУ профессоры, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, сығышы менән Салауат районы Иҫке Ҡаратаулы (Малаяҙ) ауылынан **Римма Фәтиховаға - 75 йәш** (1948).

**2 -** статистик, иҡтисадсы, БР буйынса Дәүләт статистика хеҙмәтенең территориаль органы етәксеһе урынбаҫары, Рус һәм Башҡорт википедиялары ҡатнашсыһы, Башҡортостандың атҡаҙанған иҡтисадсыһы **Рөстәм Ғатауллинға - 60 йәш** (1963).

**5 -** Башҡортостандың халыҡ артисы, Ф.Ғәскәров исемендәге дәүләт халыҡ бейеүҙәре ансамбле солисы, сығышы менән Баймаҡ районы Ишмырҙа ауылынан **Рәдис Тутмановҡа - 70 йәш** (1953).

**8 -** санитар табип, эпидемиолог, гигиена белгесе, Рәсәй Эске эштәр министрлығының Өфө юридик институты доценты, милиция подполковнигы, медицина фәндәре кандидаты, сығышы менән Сибай ҡалаһынан **Рәмзиә Ғүмәроваға - 65 йәш** (1958).

**10 -** күренекле балерина, педагог, Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры артисы, Өфө дәүләт сәнғәт институты профессоры, РСФСР һәм БАССР-ҙың атҡаҙанған артисы, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре Шәһит Хоҙайбирҙиндың ҡыҙы **Тамара Хоҙайбирҙинаның тыуыуына - 100 йыл** (1923-1998).

**-** Башҡортостандың халыҡ артисы, Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт халыҡ бейеүҙәре ансамбле бейеүсеһе, сығышы менән Хәйбулла районы Әбделнасир ауылынан **Айытбай Фәйзуллинға - 70 йәш** (1953).

**14 -** күренекле балерина, Башҡортостан дәүләт опера һәм балет театрының балет төркөмө педагог-режиссеры, СССР-ҙың һәм БАССР-ҙың халыҡ артисы, Октябрь Революцияһы һәм Почет билдәһе ордендары кавалеры **Зәйтүнә Насретдинованың тыуыуына - 100 йыл** (1923-2009).

**15 -** йырсы, БАССР-ҙың атҡаҙанған артисы **Сөләймән Абдуллиндың тыуыуына 95 йыл** (1928-2002).

**16 -** энергетик, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, Башҡортостан Республикаһының элекке премьер-министры, Башҡортостандың атҡаҙанған энергетигы, Почет һәм "Башҡортостан алдындағы ҡаҙаныштары өсөн" ордендары кавалеры **Рафаэль Байдәүләтовҡа - 80 йәш** (1943).

**18 -** журналист, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, Дәүләт Думаһы депутаты **Эльвира Айытҡоловаға - 50 йәш** (1973).

**19 -** тарих фәндәре докторы, БДУ профессоры, Фән һәм техника өлкәһендә Дәүләт премияһы лауреаты, Халыҡтар дуҫлығы ордены кавалеры **Ирек Аҡмановҡа - 90 йәш** (1933).

**20 -** күренекле тарихсы-археолог, йәмәғәт эшмәкәре, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының тәүге рәйесе, БДУ профессоры, тарих фәндәре докторы, Салауат Юлаев ордены кавалеры **Нияз Мәжитовтың тыуыуына - 90 йыл** (1933-2015).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ИШАРА

# ШӨКӨР ИТЕРГӘ ОНОТМА!

**Бер көн иртә таңдан уяндым да, үҙемде-үҙем әрләп алдым: "Ниңә бар донъя өсөн көйөнөңөң дә ултыраһың? Ниңә, шөкөр, тип кенә йәшәмәҫкә һиңә?" - тигән булдым. Әммә был уйҙарым күп булһа бер сәғәткә барғандыр, телевизорымды тоҡандырып, ундағы яңылыҡтар тапшырыуын ҡарарға ултырыуым булды, диктор һөйләгән ваҡиғалар ыңғайына тағы борсола башланым…**

Эйе, шөкөр, тип кенә йәшәп булмай шул. Телевизорҙан тапшырылған ҡурҡыныс хәбәрҙәр - бер хәл, һәр беребеҙҙең тормошонда бындай зарланырлыҡ мәлдәр булып тора. Беҙ, өлкәндәр, мәҫәлән, почта, магазин, поликлиника юлын йыш тапайбыҙ бит инде. Мине ошо пункттарҙы халыҡтан алыҫлаштырыу мәсьәләһе борсой бөгөн. Оптималләштереү уларҙы ла ялмап алды. Иң тәүҙә өйөмә яҡын урынлашҡан почтаны яптылар. Тиҙҙән поликлиникабыҙҙы ла икенсе урынға күсерҙеләр. Беҙҙең тирәлә унда ла, һулда ла банк биналары ғына тороп ҡалып бара. Торлаҡ-эксплуатация участкалары ла ирәүәнләп китте. Элек бөтә эштәрендә бер бинала башҡарып сығып була ине, әле торлаҡ-эксплуатация участкаһы етәксеһе менән сәркәтибе - бер бинала, бухгалтерҙар икенсе бинала ултыра, ә квитанцияларға төҙәтеү индереү өсөн дүрт туҡталыш үтеп, өсөнсө бинаға барырға тура килә. Почтаға ла ике квартал ары үтергә хәҙер. Ниңә шулай дәүләтебеҙ башҡарған эштәрҙән халыҡтың хәле хөртәйә? Булған уңайлыҡтарҙы ниңә емерергә? Тегендәбында һуғышын йөрөгән 72-80 йәшлек замандаштарымды йәлләп ҡуям да, бер ни ҡыла алмауым көйөфтә төшөрә.

Ә шулай ҙа, гелән былай борсолоп ултырып булмаҫ, тип, көнөлдә күтәрер, рухты дауалар ысул таптым. Уянып, йәһәт кенә йыуынып, сәй эсеп алам да, китаптар, журналдар, гәзиттәр уҡырға тотонам. Рухты дауалауҙың иң һөҙөмтәле ысулы - матур шиғыр уҡып алыу, әлбиттә. Бына шағирыбыҙ Рәми Ғарипов 1961 йылда яҙған "Диңгеҙ һәм сабый" шиғыры. Уны, ниңәләр, әлеге ҡатмарлы заманға оҡшатам һәм аҙ һанлы милләттәргә арналған һымаҡ ҡабул итәм. Иҫегеҙҙәме?

*Төҫө ҡаҫҡан. Һары бурьяҡ баҫҡан,*
*Ни булған һуң бөгөн диңгеҙгә?*
*Ел дә юҡ бит, ә ул ҡоторона!*
*Ҡоторона шулай елһеҙ ҙә...*

*Ситлектәге ас арыҫлан һымаҡ,*
*Дулап йөрөй, һыймай ярына.*
*Сал ялдарын сайҡап, асыу менән*
*Ҡорбанымны көтөп ярына?*

*Бер сабыйға әллә асыу итеп,*
*Йоторғамы уны самалай?..*
*Ярҙа уға бер ҙә иҫе китмәй,*
*Таш ырғытып йөрөй бер малай!..*

Һиҙәһегеҙме, глобалләшеү диңгеҙен һәм сабый милләттәрҙе һынландырған бит шағир. Мәҫәлән, беҙҙең башҡорттар бик боронғо, тәрән тамырлы милләт булһа ла, сабыйҙарса бер ҡатлылыҡтан һаман арына алмай. Бәлки, беҙҙең шундай булыуыбыҙ, юҡҡа-барға иҫебеҙ китеп бармауыбыҙ яҡшыраҡтыр ҙа. Ҡурайыбыҙҙы, йыр-моңдарыбыҙҙы, һоҡланғыс гүзәл туған телебеҙҙе һаҡлап, ҡурсалап йәшәүҙе дауам итергә кәрәк, тим. Рәми Ғариповтың әлеге шиғырын уҡып, шундай уйға килдем. Эйе, глобалләшеү, оптималләшеүҙәрҙән ҡурҡыуға төшөп түгел, илебеҙҙе, телебеҙҙе ҡурсалап йәшәүҙе дауам итәйек! "Шөкөр!" тип әйтергә лә онотмайыҡ.

**Фәүзиә ЯХИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Башҡортостанда Волга буйы федераль округының IV "Йәштәр йыйыны - 2023" форумына ирекмәндәр йыялар. Сара 22-25 августа Бөрйән районында ойоштороло. Һайлап алыу шарттарына ярашлы, 18 йәше тулған һәр кем ирекмән була ала. Төп критерий - "Добро.РФ" берҙәм мәғлүмәт системаһында ирекмәндәр сәғәте һаны һәм әңгәмәләшеү һөҙөмтәләре. 2023 йылдың 13 августына хәтлем теркәлергә кәрәк. Күләмле сара палаткалы лагерь форматында ойоштороla.

✔Ридаль Сәйетов Башҡортостандың төҙөлөш һәм архитектура министры бурыстарын башҡарыусы вазифаһын ҡалдыра. Ул был вазифала өс ай ғына эшләп өлгөрҙө, етәксе итеп 13 апрелдә тәғәйенләнгәйне. Уға тиклем Башҡортостан Башлығының инвестиция эшмәкәрлеге һәм инфраструктура проекттары буйынса кәңәшсеһе булды. Ридаль Сәйетов "Ағиҙел арьяғы" биләмәһендә инженер инфраструктураһы төҙөлөшөн контролдә тотто, шулай уҡ "Ауыл биләмәләрен комплекслы үҫтереү" федераль программаһын тормошҡа ашырыу өсөн яуаплы ине.

✔Башҡортостанда билдәле шағир, драматург Рәмил Ҡол-Дәүләттең 65 йыллығы уңайынан республика шиғыр һөйләү конкурсы иглан ителде. Конкурсты ойоштороусы - "Башҡортостан" ТРК-ның "Бәхетнамә" программаһы. Ойоштороусылар хәбәр итеүенсә, конкурсҡа эштәр 20 августҡаса ҡабул ителә. Мәғлүмәтте һәм видеоматериалдарҙы электрон формала yaniliktar@mail.ru электрон почтаһына ебәрергә кәрәк.

✔Башҡортостандың машиналар эшләү, катализаторҙар етештереү һәм геофизика өлкәһендә мәшғүл алты компанияһы АҠШ санкцияларына эләкте. Яңыртылған санкция исемлегенә ингән предприятиелар араһында - Ишембай катализаторҙар махсуслаштырылған химия заводы, Стәрлетамаҡтан КНТ КАТ (КНТ Груп) йәмғиәте, РН КАТ йәмғиәте (Стәрлетамаҡ), шулай уҡ Стәрлетамаҡ катализаторҙар заводы, "Витязь" машиналар эшләү компанияһы (Ишембай) һәм "ВНИИГИС" ғилми-етештереү предприятиеһы (Октябрьский).

✔Украина президенты указы менән сит ил компанияларына ҡарата санкция исемлектәре тулыландырылды. Унда Рәсәйҙән, Белоруссиянан, Грузиянан, Ҡаҙағстандан 291 ойошма һәм 190-дан ашыу физик шәхес бар. Санкциялар һалынған компаниялар араһында - Башҡортостан предприятиелары: "Газпром нефтехим Салауат", Салауат химия заводы, "Геоскан-Өфө" йәмғиәте, "Полиэф" акционерҙар йәмғиәте.

**✓ Башҡортостандан ситтә йәшәгән башҡорттарҙың күпселеге - Силәбе өлкәһендә. Тыуған телен өйрәнгән милләттәштәребеҙ кәмей бара. Төп проблемаларҙың береһе - уҡытыусыларҙың бер-береһе менән тейешенсә аралашмауы.**



*ҠЫҪҠАСА*

# ҮҘЕБЕҘ ӘҘЕРЛӘЙБЕҘ!

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Патриот" хәрби-тарихи паркында пилотһыҙ осоу аппараттары менән идара итеү оҫталығына өйрәтеү буйынса хәрби-ялан лагерында булды.** Пилотһыҙ осоу аппараттары операторҙарын әҙерләү үҙәге инструкторҙары республика етәксеһенә БПЛА операторҙарын уҡытыу өсөн төп шарт - Рәсәйҙең Оборона министрлығы менән килешеү төҙөү, тине. Һамар өлкәһендә хәрби әҙерлек үткән "Башҡортостан" мотоуҡсылар полкы яугирҙары араһынан махсус һайлап алынған төркөмдә лә уҡыта башлайбыҙ, тип билдәләне инструкторҙар. Киләсәктә производство ҡеүәттәре, ауыл хужалығы, нефть, газ сығарыу өсөн пилотһыҙ осоу аппараттары операторҙарын әҙерләү планлаштырыла. Радий Хәбиров шулай уҡ дошман бронетехникаһын юҡ итеү буйынса дрондарҙың эштәрен һәм дрондан һаҡланыу технологияларын ҡараны. "Беҙҙең алда өс бурыс тора. Беренсеһе - етештереү. Икенсеһе - наводчиктарҙы, пилотһыҙ осоу аппараттары операторҙарын уҡытыу, тәү сиратта үҙебеҙҙең батальондар өсөн. Ә өсөнсөһө - граждандарҙың ҡулланыуы", - тип йомғаҡ яһаны Радий Хәбиров.

✓ **Республика йортонда Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Рәсәй милли гвардияһы ғәскәрҙәренең Волга буйы округы командующийы Сергей Просяник менән осрашты.** Командующий был вазифаға 2023 йылдың июнендә тәғәйенләнгәйне. Көн тәртибендә - Рәсәй гвардияһы подразделениеларының матди-техник базаһын үҫтереү һәм республиканың власть органдары менән мөнәсәбәттәрҙе нығытыу мәсьәләләре. Осрашыуҙа республика етәксеһе һәм Рәсәй гвардияһы ғәскәрҙәренең Волга буйы округы командующийы Башҡортостанда махсус тәғәйенләнештәге көстәр әҙерләү буйынса уҡыу үҙәген булдырыу мәсьәләһен тикшерҙе. Республика быныһ өсөн майҙансыҡ һайлап бирергә әҙер булыуын белдерҙе.

✓ **Миәкә районында "Нарыҫтау" туристик комплексы киңәйтелә, тип хәбәр итте проект кураторы Альберт Сәфәрғолов Республика йортонда уҙған "Инвестиция сәғәте"ндә.** Турбаза 2019 йылда Сергеев быуаһы буйында төҙөлгән. Уның биләмәһендә 25 кешелек тирмәләр, мунса комплексы, кафе һәм беседкалар бар. Хәҙер инвестор туристар өсөн 36 урынға иҫәпләнгән ҡунаҡхана комплексын төҙөргә йыйына. Бының өсөн 41 миллион һум талап ителә. Республиканың инвестиция комитеты тәҡдим ителгән проектты хупланы һәм уға өҫтөнлөклө тигән статус бирҙе. Уны ғәмәлгә ашырыу барышында инженер инфраструктураһын булдырыуға сығымдарҙың бер өлөшө кире ҡайтарыла. Бынан тыш, быйыл проблемалы юлдарҙы ремонтлау программаһы буйынса Әлшәй районының Ҡыпсаҡ-Асҡар ауылынан алып Миәкә районының Нарыҫтау ауылына хәтлем автомобиль юлы участкаһы тәртипкә килтерелә, ошо юл менән турбазаға барырға мөмкин. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров инвесторҙарға турбаза биләмәһендә ҡунаҡтар өсөн глэмпинг йәки башҡа форматтағы объекттар төҙөү мөмкинлеген дә ҡарарға кәңәш бирҙе.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# ЯРЫШАЛАР, КӨРӘШӘЛӘР...

**Өфөлә "Беҙ бергә. Спорт" сурдлимпиясыларҙың халыҡ-ара йәйге уйындары бара.**

Башҡортостандың баш ҡалаһына 32 илдән 700-ҙән ашыу спортсы килде, Рәсәйҙең йыйылма командаһында - 495 кеше, улар өсөн ике меңдән ашыу көйәрмән йыйылйа. Сурдлимпиясылар һаңғырауҙар спортының 21 дисциплинаһында иң көслөләр исеме өсөн көрәшә (бадминтон, гандбол, баскетбол, еңел атлетика, өҫтәл теннисы, йөҙөү, велосипед спорты - маунтинбайк, велосипед спорты - шоссе, пуля менән атыу, спорт ориентиры, волейбол, карате, тхэквондо, футбол, ирекле көрәш, грек-рим көрәше, дзюдо, самбо, теннис, пляж волейболы, боулинг). Ярыштар Өфөнөң 13 спорт объектында ойоштоола.

Спорт майҙансыҡтарында 300-гә яҡын ирекмән эшләй. 100 кеше - Рәсәйҙең Һаңғырауҙар спорты федерацияһынан, Өфөнән иһә 200 волонтер. Уларҙың 110-ы ым-ишара телен белә. Бынан тыш, сурдотәржемәселәр ҙә йәлеп ителгән. Башҡортостандың спорт министры Руслан Хәбибов хәбәр итеүенсә, ведомство Бөтә Рәсәй һаңғырауҙар йәмғиәтенең төбәк бүлексәһе менән берлектә Сурдлимпиясыларҙың йәйге уйындарында ҡатнашыусылар һәм ҡунаҡтар өсөн мәҙәни программа әҙерләгән.

Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, "Беҙ бергә. Спорт" сурдлимпиясыларҙың халыҡ-ара йәйге уйындарын уҙғарыу тураһында ҡарар 15 июндә Петербург халыҡ-ара иҡтисади форумында ҡабул ителде, унда өс яҡлы килешеүгә ҡул ҡуйылды, тип хәбәр иткәйне "Башинформ".

# БАҪЫУҒА ЙЫЙЫЛДЫЛАР



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Көйөргәҙе районының Яңы Мораптал ауылында үткән "Баҫыу көнө" семинарында ҡатнашты. Йолаға ярашлы, бындай сара йыл да ураҡ алдынан ойоштоола.**

Республиканың алдынғы ғилми учреждениелары һәм үҫемлектәрҙе, орлоҡтарҙы һаҡлау сараларын етештереүселәр Радий Хәбировты ауыл хужалығы өлкәһендәге асыштары менән таныштырҙы. Атап әйткәндә, улар бойҙай, борсаҡ, ужым арышы, ҡарабойҙай, картуф, емеш-еләк культураларының яңы сорттарын күрһәтте. Республика бюджетынан элиталы орлоҡтар һатып алыуға йыл һайын 100 миллион һум бүленә. Мелиорация мәсьәләләренә лә ҙур иғтибар бирелә. Бөгөнгә республика биләмәһендә 39,8 мең гектар ҡеүәткә эйә 186 һуғарыу системаһы бар. Быйыл 813,2 гектар ҡеүәтендәге ике объект сафҡа индерелгән, федераль бюджеттан 63,7 миллион һумлыҡ ярҙам күрһәтелгән.

Республика етәксеһе Рәсәйҙең һәм Беларусь Республикаһының төп етештереүселәренең ауыл хужалығы техникаһын ҡараны.

Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов әйтеүенсә, 2023 йылда 6,7 миллиард һумға 1450 берәмек техника һатып алынған. Был уҙған йылдың ошо уҡ осороңа ҡарағанда 1,4 миллиард һумға күберәк. Ә 2019 йылдан республика аграрийҙары 48 миллиард һумға 14,5 мең берәмек яңы техника һәм ҡоралмал һатып алған.

"Былтыр беҙ 5 миллион тоннанан ашыу иген йыйып алдыҡ. Быйыл йыл аномаль ҡырауҙарҙан башланды, һуынан оҙайлы ҡоролоҡ булды. Шулай ҙа һеҙ яҡшы уңыш алырһығыҙ, тип ышанабыҙ. Мин ауыл халҡына тағы бер тапҡыр рәхмәт әйткем килә. Махсус хәрби операция башланғас, тотош республика берләште. Алғы һыҙыҡтағы яугирҙарыбыҙға ярҙам күрһәтеүҙә тап һеҙ ҙур роль уйнайһығыҙ: аҙыҡ-түлек, техника - нимә кәрәк, барыһын да ебәрәһегеҙ. Хатта гуманитар ярҙам йыйған логистика склады ла "Башсельхозтехника" предприятиеһында урынлашҡан. Шуның өсөн һеҙгә ҙур рәхмәт", - тине Башҡортостан Башлығы.

# ТУҒАН ТЕЛДЕ ӨЙРӘН!




**Башҡорт теле дәүләт теле булмаған төбәктәрҙә эшләү тәжрибәһе менән уртаҡлашыу өсөн Силәбелә туған башҡорт телен һаҡлауға һәм өйрәнеүгә арналған "Белем" төбәк-ара конференцияһы ойоштоола. Яңыраҡ был проект Башҡортостан Башлығы гранттары конкурсында еңеүсе булды.**

Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетынан хәбәр итеүҙәренсә, төп контингент - Силәбе, Свердловск, Ырымбур һәм Ҡурған өлкәләре уҡытыусылары. Был төбәктәрҙә башҡорттар компактлы йәшәй һәм улар өсөн туған телде өйрәнеү көнүҙәк мәсьәлә булып тора. Конференцияны даими үткәреү ниәте бар. Был осрашыуҙар һәм педагогтар өсөн мөһим мәсьәләләрҙе тикшереү - оҙайлы аралашыуға, тимәк, даими үҫешкә башланғыс бирәсәк.

Гранттың заявкаһында билдәләнеүенсә, Башҡортостандан ситтә йәшәгән башҡорттарҙың күпселеге - Силәбе өлкәһендә. Туған телен өйрәнгән милләттәштәребеҙ йылдан-йыл кәмей бара. Төп проблемаларҙың береһе - уҡытыусыларҙың бер-береһе менән тейешенсә аралашмауы, һөҙөмтәлә белем биреү учреждениеларында ла уҡытыу кимәле түбәнәйә, ә ҡайны бер осраҡтарҙа бөтөнләй юҡҡа сыға. Шуға күрә мөһим мәсьәләләрҙе ҡарау өсөн туған тел уҡытыусыларына айырым майҙансыҡ ойоштороорға ҡарар ителде.

# АҠЫЛЛЫ...



**Өфөлә ҡалаларҙы үҫтереүгә һәм һанлы үҙгәртеп ҡороуға арналған IV "Аҡыллы ҡала - Аҡыллы ил" халыҡ-ара форумы асылды.**

Күләмле форум БРИКС-тың Эшлекле советында хуплау тапты, ә ҡатнашырға 50-нән ашыу ил саҡырылды. Форум эшендә туранан -тура, шулай уҡ онлайн рәүештә донъяның ете иленән 2 меңгә яҡын кеше ҡатнаша. "Аҡыллы ҡала - Аҡыллы ил" халыҡ-ара форумы ҡалаларҙы үҫтереү өлкәһендә алдынғы тәжрибә менән уртаҡлашыу һәм яңы идеялар тәҡдим итеү өсөн ҙур майҙансыҡ булып тора.Төп маҡсат - бизнес менән власть араһында диалог булдырыу. Форум эшендә федераль, төбәк һәм муниципаль власть органдары, дәүләт корпорациялары вәкилдәре, тармаҡ ассоциациялары етәкселәре һәм төрлө кимәлдәге бизнес вәкилдәре ҡатнаша. Форумдың эшлекле программаһы биләмәләрҙе тотороҡло үҫтереү өлкәһендәге мөһим йүнәлештәргә һәм инновацияларға арналған. Ҡатнашыусылар үҙ проекттарын күрһәтеп, төрлө тармаҡ белгестәре менән тәжрибә уртаҡлаша ала. Улар араһында - идара итеүҙе һанлы үҙгәртеп ҡороу, төҙөлөш, мәғариф, һаулыҡ һаҡлау, туризм, транспорт, юл төҙөлөшө һәм энергетика.Сараны Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров асты. Ул ҡатнашыусыларҙы сәләмләп, Башҡортостан өсөн ошо халыҡ-ара форумды ҡабул итеү оло мәртәбә һәм яуаплылыҡ икәнен билдәләне. Форум 28 июлгә тиклем эшләне.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Владимир Путин яҡташтарыбыҙҙы дәүләт наградалары менән бүләкләне. "Газпром трансгаз Өфө" магистраль газүткәргестәр идаралығы начальнигы Марат Ғәләүиев 2-се дәрәжә "Ватан алдындағы ҡаҙаныштары өсөн" ордены миҙалына лайыҡ булды. Уның коллегалары Николай Каштановҡа һәм Таһир Сәлиховҡа "Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған нефть һәм газ сәнәғәте хеҙмәткәре" тигән, ә Ҡырмыҫҡалы ветеринария станцияһы начальнигы Ғәлинур Ҡунаҡаевҡа "Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған ветеринария табибы" исеме бирелде.

✓"Башҡортостан ҡала яны пассажирҙар компанияһы" йәмғиәте Дим - Әшә - Өфө маршруты буйынса "Ҡарлуғас" ҡала яны поезы хәрәкәтен ойоштороу мөмкинлеген ҡарай. Был йүнәлешкә ихтыяжды баһалау өсөн компания республикала йәшәүселәрҙең фекере менән ҡыҙыҡһына. 2022 йылдың яҙында Башҡортостанға "Ҡарлуғас" ҡала яны электр поездарының яңы составы килде. "Ҡарлуғас"та - биш вагон, 466 ултырғыс, бөтәһе 822 пассажирҙы һыйҙыра.

✓Рәсәйҙән "Беҙ бергә. Спорт" сурдлимпиясыларҙың халыҡ-ара йәйге уйындарында ҡатнашҡан ике йыйылма команда составында Өфөнән 23 спортсы бар. Өфө хакимиәтенең физик культура һәм спорт идаралығы начальнигы Егор Сорокин әйтеүенсә, Рәсәй йыйылмаһы "Рәсәй-1" һәм "Рәсәй-2" командаларынан тора. Беренсеһендә Өфөнән - 10, икенсеһендә - 13 спортсы. Ярыштар ойошторолған майҙансыҡтарға инеү бушлай, тип өҫтәне ул һәм ҡала халҡын, ҡунаҡтарын Рәсәй спортсыларының сығыштарын ҡарарға саҡырҙы.

✓29 июлдә "Аҡбуҙат" ипподромында "Терра Башҡортостан" ат-спорт турнирының юбилей миҙгеленең икенсе сирек финалын асыу тантанаһы була. Турнирҙың дөйөм бүләк фонды - 10 миллион һум. Тамашасылар өсөн бай күңел асыу программаһы ҡаралған. Мәҫәлән, балалар өсөн уйын майҙансыҡтары, сағыу декорациялы тематик фотозона, билдәле иждаи коллективтарҙың сығыштары.

✓Telegram мессенджерына Өфөнөң 450 йыллығының рәсми символы - һыуһар һүрәте төшөрөлгән стикерҙар өҫтәлде. Анимацияланған стикерпак "Муха" студияһы һәм республиканың Йәмәғәт палатаһы аппараты көсө менән булдырылған.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ҺОРАУ-ЯУАП

# СИТ ИЛ ПАСПОРТЫ



**Ун йылға биометрик сит ил паспорттарын рәсмиләштереү өсөн ғаризалар ҡабул итеү тергеҙелде.**

Дәүләт пошлинаһы күләме элеккесә: өлкәндәр өсөн - 5000, 14 йәшкә тиклемге балалар өсөн 2500 һум тәшкил итә. Ғаризаны Дәүләт хеҙмәттәре, Күп функциялы үҙәк аша йәки Эске эштәр министрлығында бирергә мөмкин.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостанда Күп функциялы үҙәктең ҡайһы бер офистарында кешеләр биометрик мәғлүмәттәрҙе үҙаллы тапшыра алһын өсөн криптокабиналар ҡуйылған. Бындай кабиналар һанлы фотокамера, күләгәһеҙ яҡтыртыу системаһы, бармаҡ эҙҙәрен һәм документтарҙы сканерлау ҡоролмаһы менән йыһазландырылған.

Криптокабиналар урынлаштырылған Күп функциялы үҙәк офистары исемлеге ошонда:

- Туймазы ҡ., С. Юлаев урамы, 69А;
- Нефтекама ҡ., Тәҙәүселәр урамы, 59;
- Күмертау ҡ., Тәҙәүселәр урамы, 59;
- Стәрлетамаҡ ҡ., Хоҙайбирҙин урамы, 83;
- Өфө ҡ., Яңы күпер урамы, 8;
- Белорет ҡ., 5 Июль урамы, 3;
- Октябрьский ҡ., Кортунов урамы, 15;
- Сибай ҡ., Горький урамы, 74к.

# ҒӘҘӘТТӘН ТЫШ ХӘЛДӘРҘӘ



**Көтөлмәгән хәл тураһында нисек хәбәр итергә, ярҙам һорарғамы йәки мөһим мәғлүмәт хаҡында фажиғә урынынан хәбәр ебәрергәме?**

Был хәлдә 112 мобиль ҡушымтаһы ярҙамында хәбәр итергә мөмкин. Уны телефонға GooglePlay йәки AppStore системаларынан күсереп алырға кәрәк. Ғәҙәттән тыш булған төрлө хәлдәрҙә (әгәр үҙең шундай хәлгә тарыһаң йәки шаһит булһаң) 112 ҡушымтаһы аша 112 системаһы шылтыратыуҙарын эшкәртеү үҙәгенә хәбәр ебәрергә, көтөлмәгән хәл булған урындың аныҡ координаталарын билдәләргә, фото һәм видео ебәрергә мөмкин. Быны янғын, автомобиль аварияһы йәки енәйәт урынынан эшләргә була.

112 мобиль ҡушымтаһының файҙаһы:

- Көтөлмәгән хәл килеп тыуған осраҡта һеҙҙең ҡайҙа икәнегеҙҙе беләсәктәр.

- Әгәр ҡушымта аша ашығыс хеҙмәт саҡыртһаң, диспетчер һеҙҙең профилдәге мәғлүмәттәрҙе, телефон номерын һәм аныҡ урынығыҙҙы белеп торасаҡ.

- Ярҙам саҡыртыу карточкаһына ваҡиға урынынан һүрәтләмә, фото, аудио һәм видео өҫтәргә мөмкин - был осраҡта ашығыс хеҙмәт һеҙҙе тиҙерәк табасаҡ.

- Заявкаңың статусын, шулай уҡ үҙегеҙҙең барлыҡ мөрәжәғәтегеҙҙе ҡарарға мөмкин.

- Туристик төркөмдә теркәргә була - был хәүефһеҙлек һәм кәрәк саҡта ваҡытында квалификациялы ярҙам алыу өсөн мотлаҡ.

- Әгәр төбәктә интернетҡа инеү йәки хәл-ваҡиға булған ерҙә теркәлеү мөмкин булмаһа, мөрәжәғәтегеҙ геомәғлүмәт, исем-шәрифегеҙ менән, хәл-ваҡиғаны һүрәтләгән смс-хәбәр рәүешендә тапшырыла.

- Өҫтәүенә, ҡушымтала Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты яңылыҡтары һәм мөһим мәғлүмәттәре менән танышырға мөмкин.

# ПОЛИС БУЙЫНСА ДАУАЛАНЫУ СИКЛӘНӘМЕ?




**Ҡайһы бер киң мәғлүмәт сараларында мотлаҡ медицина страховкаһы полисы буйынса дауаланыуҙың сикләнәсәге тураһында таратылған мәғлүмәт ысынбарлыҡҡа тап килмәй. Башҡортостанда мотлаҡ медицина страховкаһы полисы буйынса дауаланыу бушлай.**

Полис буйынса күрһәтелгән хеҙмәттәр исемлеге юғары технологиялы медицина ярҙамының яңы төрҙәре, заманса диагностика һәм дауалау алымдары менән даими тулыландырыла. Уларҙың барыһы ла бушлай медицина ярҙамы күрһәтеү буйынса дәүләт гарантиялары программаһына индерелгән. Программаны Хөкүмәт йыл һайын раҫлай.

Сирҙе асыҡлау һәм дауалау маҡсатында ниндәй ҙә булһа процедуралар ҡулланыу тураһындағы ҡарарҙы дауалаусы табип ҡабул итә. Ул диагностика процедураларын, анализдар, дарыуҙар тәғәйенләй, йүнәлтмә бирә. Был йәһәттән бер ниндәй ҙә үҙгәрештәр булманы һәм ҡыҙалланмай. Мотлаҡ медицина страховкаһы полисы буйынса эшләгән поликлиника һәм дауаханалар пациент мөрәжәғәт иткән төбәктә уның өсөн мөмкин булған дауаланыу саралары тураһында мәғлүмәт бирергә бурыслы. Шулай уҡ медицина ярҙамын бушлай алған осраҡта медицина ойошмаһы уны көтөү ваҡыты хаҡында ла хәбәр итергә тейеш. Был талап Рәсәй Хөкүмәте ҡарары менән нығытылған. Ул 2012 йылдан ғәмәлдә һәм мотлаҡ булып тора.

# ҮҘЕБЕҘҘӘ ЕТЕШТЕРЕЛГӘНЕ...



**Сәнәғәт һәм сауҙа министрлығы үпкәне яһалма елләтеү аппаратын сит ил етештереүселәренән һатып алыуҙы тыйырға тәҡдим итте, сөнки Рәсәйҙә сифат яғынан бер ҙә ҡалышмаған үҙебеҙҙекеләре лә бар.**

Был турала закон ҡабул ителгәнме? Әлегә юҡ, министрлыҡ документ проектын әҙерләгән һәм уны йәмәғәт фекер алышыуҙарына сығарған. Тимәк, бөтә ҡыҙыҡһынған яҡтар, шул иҫәптән медиктар һәм пациенттар уның буйынса баһалама ҡалдырасаҡ. Фекер алышыу йомғаҡтары буйынса проект аҙағынаса эшләп бөтөләсәк. Бынан тыш, үпкәне яһалма елләтеү аппаратының төп ҡулланыусыһы булған Һаулыҡ һаҡлау министрлығы иҫкәрмә яһай ҡалһа, сит илдәргә сығарыу тыйылған тауарҙар исемлеге ҡайтанан ҡараласаҡ.

Рәсәйҙә әлегә нимә етештерәләр? Беҙҙең илдә рентген өсөн аппараттар, кардиографтар, төрлө мониторҙар, лазерҙар, шулай уҡ гормондар, онкомаркерҙар һәм инфекциялар кимәлен билдәләү өсөн тест-системалар файҙаланыла.

ҠЫҪҠАСА

# БЕҘ - ИҢ ЯҠШЫҺЫ!

**Өфөлә урынлашҡан донъя кимәлендәге Евразия ғилми-белем береү үҙәге - Рәсәйҙә иң яҡшыһы.** Был хаҡта Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров белдерҙе. Рейтингта енеү яулау беҙҙең республикаға ғилми-белем береү үҙәге үҫешенә өҫтәмә рәүештә 158 миллион һум аҡса килтерҙе, тип өҫтәне ул. "21 июлдә Рәсәй Хөкүмәте рәйесе урынбаҫары Дмитрий Чернышенко рәйеслегендә донъя кимәлендәге фәнни-белем береү үҙәктәре советы ултырышы үтте. Совет Рәсәй ғилми-белем береү үҙәктәренең 2022 йылдағы эшенә йомғаҡ яһаны һәм өс төркөмдәге рейтинг йомғаҡтарын иғлан итте. Беренсе, иң көслө төркөмдә, беҙ 1-се урынды алдыҡ. Хәҙер хаҡлы рәүештә Евразия ғилми-белем береү үҙәге - донъяла иң яҡшыһы тип әйтә алабыҙ. Барығыҙҙы ла ҡотлайым!" - тине республика етәксеһе.

✓ **Өфөлә 589 сығарылыш уҡыусыһына "Уҡыуҙа өлгәшкән уңыштары өсөн" миҙалы тапшырылды.** Берҙәм дәүләт имтиханы йомғаҡтары буйынса сығарылыш уҡыусыларының 29 эше 100 балға баһаланды. Был хаҡта Өфөнөң мәғариф идаралығы начальнигы Азат Батыршин һөйләне. Уның һүҙҙәренсә, Өфөнөң 38-се мәктәбенән Анастасия Пантелейко инглиз һәм рус телдәренән юғары балл йыйған. Рус теле буйынса һынауҙы ул былтырғы уҡыу йылында, 10 класта уҡыған саҡта тапшырған. Йыл һайын тырыш һәм һәләтле уҡыусыларға тик "бишле" билдәләренән торған аттестаттар бирелә, тип өҫтәне Азат Батыршин. Урта дөйөм белем тураһында аттестат менән бергә уларға "Уҡыуҙа өлгәшкән уңыштары өсөн" миҙалы ла тапшырыла. Быйыл 589 сығарылыш уҡыусыһы Берҙәм дәүләт имтиханында юғары белем кимәлен раҫланы. Әйткәндәй, быйыл Өфөлә Берҙәм дәүләт имтиханында 4,5 меңдән ашыу уҡыусы ҡатнашты. Ҡалала 25 имтихан пункты эшләне. Һынауҙарҙың төп осоро 20 июнгә тиклем оҙайтылды.

✓ **Социаль фондтың Башҡортостан Республикаһы буйынса бүлексәһенең төбәк бәйләнеш үҙәге телефоны үҙгәрҙе.** Хәҙер социаль һәм пенсия тәьминәте мәсьәләләре буйынса түбәндәге телефон аша консультация алырға мөмкин: 8 (800) 200-02-26. Шылтыратыуҙарҙы ҡабул итеү ваҡыты: дүшәмбенән кесе йомаға тиклем - 9.00 - 18.00 сәғәттәрҙә, йома - 9.00 - 16 сәғәт 45 минутҡа тиклем. Стационар һәм Рәсәй биләмәһендә теркәлгән кәҫә телефоны абоненттары өсөн шылтыратыу бушлай. Бәйләнеш үҙәге операторҙары ғәмәлдәге бөтә социаль ярҙам саралары - берҙәм пособие, Әсәлек капиталы, пенсиялар, социаль түләүҙәр һәм пособиелар, шифаханаға путевкалар, ғаризаның статусы һәм башҡа һорауҙар буйынса мәғлүмәт бирә.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған киңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклеге онотмағыҙ.**

## Күҙҙәр

❖ Күҙ насар күргәндә кишер, сөгөлдөр, ҡыяр, селдерей, цикорий, петрушка, шпинат, ҡара көртмәлә, һарымһаҡ, укроп һуттарын эсеү файҙалы. Был йәшелсә-үләндәрҙе түтәлдән алып ашау ҙа файҙалы.

❖ Йыуынғанда ипләп кенә күҙгә һыуыҡ һыуҙы 40 тапҡырға тиклем сәсрәтеп йыуынырға. Бындай күнекмә күҙҙәрҙә ҡан йөрөшөн тиҙләтә.

❖ Ҡара көртмәлә емешен йәки шунан әҙерләнгән ҡайнатманы көнөнә 3-4 тапҡыр 2-3 ҡалаҡ ашарға. Ул күреү һәләтен яҡшырта, күҙҙәрҙең талыуын баҫа. Шулай уҡ һары сейә (черешня) лә күҙҙәр өсөн бик файҙалы.

❖ 2 балғалаҡ ҡара көртмәлә япрағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтеп һөҙөргә һәм көнөнә 2 тапҡыр яртышар стакан эсергә.

❖ 50 грамм ҡарһаҡ үлән (очанка) үләненә 1 литр ҡайнар һыу ҡойоп, 3 сәғәт төнәтеп һөҙөргә. Көнөнә 3-4 тапҡыр яртышар стакан эсергә.

## Ҡолаҡ шаулаһа

❖ Виноград һеркәһен (уксус) һыуға 2:1 нисбәтендә ҡушырға һәм утҡа ҡуйырға. Ҡайнап сыҡҡан, күтәрелгән быуы өҫтөнә башты эйеп, ҡолаҡты йылытып торорға.

## Баш әйләнһә

❖ Баш ауыртанда һәм әйләнгәндә көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан алда 0,5-1 стакан кишер һуты эсеү файҙалы.

❖ 3 өлөш кишер, 1 өлөш сөгөлдөр, 2 өлөш анар (гранат) һуттарын бергә ҡушып, көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда эсергә.

❖ 300 грамм һарымһаҡты таҙартып, ярты литрлыҡ банкаға һалырға һәм тулғансы спирт ҡойорға. 2 аҙна төнәтергә. Көн һайын ярты стакан һөткә 20 тамсы тамыҙып эсергә.

❖ 1 балғалаҡ петрушка (петрушка посевная) орлоғо порошогына бүлмә температураһындағы 1 стакан һыу ҡойоп, 8 сәғәт төнәтергә. Төнәтмәне көнөнә 4 тапҡыр сирек стакан эсергә.

❖ 1 балғалаҡ туҡранбаш (клевер) сәскәһенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 5 минут ҡайнатырға һәм һөҙөргә. Көнөнә 4-5 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә.

Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Аҡбаш сыпҡай**
**(Серощекая поганка)**



Сыпҡайҙар кеүектәр тәркөмө - һыу ҡоштары, башы һәм муйыны ҡара, түше ерән, ҡорһаҡ йөнө, ҡанат ҡауырһындары ҡара-һоро, ә күкрәк аҫты, арҡаһының урта өлөшө, ҡанат төптәре, ҡабырғалары, ҡойроғо аҡ. Ағалаҡҙ тип тә йөрөтәләр. Ә аҡбаш сыпҡай иһә уртаса ҙурлыҡта, һуна өйрәктән бер аҙ бәләкәйерәк. Йылдың бөтөн миҙгелдәрендә лә төҫө бер төрлө, башының өҫкө өлөшө ҡара, ҡара төҫ сукышына тиклем төшөп тора, түше, сикәләре аҡһыл. Ҙур сыпҡайҙың күҙҙәре һәм ҡара төҫтәге "бүреге" араһында аҡ һыҙаты бар. Суҡышының төбө һары, башҡа ере ҡарағусҡыл. Ҡош туйы мәлендә муйыны алдан һәм ҡабырғанан, шулай уҡ түшенең алғы өлөшө тутыҡ-ҡыҙыл төҫтә. Башҡа ваҡытта бындай төҫтә булмай. Туй мәлендә ҙур булмаған өлпөһө, ҡара бәләкәй генә яғаһы барлыҡҡа килә. Инә ҡош та, атаһы ла бер төҫтә. Шымдар. Туй осоронда төрлө тауыштар сығаралар, ҡайһы саҡта ҡолон кешнәгән кеүек тауыштар ишетергә була.

Оя ҡороп йәшәйҙәр, ҡышларға йылы яҡҡа китәләр. Көньяҡ Америка, Евразияла осрай. Көнбайыш тибы бөтөн Европаға таралған. Башҡортостанда иһә уның көнсығыш төрө осрай, улар иһә һирәк һәм һандары йәһәтенән дә күпкә кәмдәр. Ошо сәбәпле Башҡортостандың Ҡыҙыл китабына индерелгән.

Республикала был ҡоштар төрлө йылдарҙа Асылыкүл, Шиңгәккүл, Толпаҡ, Атауҙы, Төньяҡ Үләнде, Бәләкәй Үләнде, Ҡарағайлы, Суртанды, Сыбаркүл, Һатҡы күлдәрендә осраған. 1965 йылдың май аҙағында Бәләкәй Үләнде күлендә 10 пар тирәһе иҫәпләнгән.

Аҡбаш сыпҡай көн ҡошо, миграция мәлендә төнөн дә әүҙем. Күпселек йөҙөп йөрөй, яҡшы сума. Себештәрен ашатҡан мәлдә һыу аҫтына 3 секундҡа сума, шулай уҡ 3 минут та тора ала. Минутына 3-6 тапҡыр сума. 1 - 1,5 метр тәрәнлектә аҙыкты яҡшы таба. Осоу тиҙлеге тиҙ, тура оса. Һыуҙан осоп китер өсөн бер аҙ йүгерергә кәрәк. Ҡоро ерҙән оса, шулай уҡ атлап йөрөй алмай. Башлыса бөжәктәр менән туҡлана. Туҡланыу рационында балыҡ 0,03 процент.

Яңғыҙ ҡош, оя ҡорғанда ғына парҙар яһайҙар. Себештәрҙе үҫтергәндә ата ҡош та ҡатнаша. Оя ҡорор өсөн уртаса һәм эре һыу үсемлектәрен һайлайҙар. Төп шарт булып - быттырғы үсемлектәр булыуы тора. Ояны ла ҡамыштан, иҫке япраҡтарҙан, тамырҙарҙан яһайҙар. 2-3 йомортҡа һала, оя һын ҡалдырып китергә кәрәк булғанда йомортҡаларҙы һыуҙан алып сыҡҡан йәшел үлән менән ҡаплап китә. Себештәр сыҡҡан ғына мәлдә өлкән ҡоштарҙың арҡаһына йә ҡанаттары араһына ултырып йөҙә. Берәй айҙан үҙҙәре туҡлана башлай, сентябрҙә яҡшы осалар. Августа ҡоштарҙың ҡанаттары ныҡынғас та, инә менән ата ҡош уларҙы ҡалдырып китә. Сентябрҙә йәш ҡоштар тупланып, октябрь айында осоп китәләр. Яҙ май айында кире ҡайталар.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

"КИСКЕ ӨФӨ" АРХИВЫНАН

# САМАУЫР ТУЛАНЫҠЫМЫ,

## әллә Ҡытайҙыҡымы?

**Евразия ҡитғаһында башҡорттар иң боронғо халыҡтарҙың береһе. Тарихты сәйәсәт менән бутамаған, уны ғәҙел өйрәнгән һәр профессиональ тарихсы быны күрә һәм билдәләп китә. Бик боронғо дәүерҙәрҙән беҙҙең көндәргә тиклем һаҡланып килеп еткән халҡыбыҙҙың яҙмышы ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс, аянәслы ла.**



Нимә генә күрмәгән ул. Рәсәйгә ҡушылғандан алып урыҫ алып барған бер яу, һуғыш-талаш башҡортһоҙ үтмәгән. Беҙ быны әле әҙ-мәҙ булһа ла беләбеҙ. Әммә беҙҙең халыҡтың Рәсәй тарихына индергән өлөшө тик һуғыш менән генә сикләнмәй. Рәсәй тигеҙлектәренән күсенеп килгән тау күрмәгән урыҫтарҙы Уралдың таулы райондарында хужалыҡ итеү ысулдарына беҙҙең халыҡ өйрәтә. Әлбиттә, ул үҙе лә урыҫтан ниҙер өйрәнә, ниmәләрҙелер отоп алып, үҙ хужалығында ҡуллана. Был бөтә донъяла шулай. Халыҡтар бер-береһенән бер туҡтауһыҙ өйрәнәләр. Мәҫәлән, хәҙер бөтә донъяға таралған картуф, кукуруз, помидорҙы халыҡтар Америка индеецтарынан үҙләштергән икәне билдәле.

Халыҡтарҙың бер-береһенән өйрәнеүенең һөҙөмтәһенә бер ҡыҙыҡ, әммә бигүк билдәле булмаған бер миҫал. Беҙ бөтәбеҙ ҙә "Урыҫ самауыры" һанап йөрөгән сәй ҡайнатыу ҡорамалының Рәсәйҙә таралып китеүе башҡорттар менән бәйле икәнен күбебеҙ белмәйҙер ҙә. Хатта башына ла индереп сығармайҙыр. Ә был ысынлап та шулай. Рәсәйҙәге беренсе самауырҙы Уралда, ғәйнә башҡорттары ерҙәрендә төҙөлгән Ирген заводында, ә аҙаҡтан Соҡсон заводында эшләй башлайҙар.

Ә эш былай була. Урал заводтарының хужаһы В.Н.Татищев Ирген заводы эшселәренән махсус артель төҙөй, ә был артелдекеләр үҙҙәренә бол туплау маҡсатында урындағы халыҡтың - башҡорттарҙың малмөлкәтен талау менән шөғөлләнә. Ошондай бер талау ваҡытында урыҫ эшселәренең ҡулына быға тиклем улар ғүмерҙә күрмәгән ҙур ҡорһаҡлы сәйер бер ҡорамал килеп эләгә. Был башҡорттарҙың һыу ҡайнатыу ҡорамалы була.

Ирген заводы приказчигы Родион Набатов тигән берәү был ҡорамалды күпләп етештереүҙе ойоштора. Шулай итеп, беҙ хәҙер бөтәбеҙ ҙә "урыҫ самауыры" тип белгән сәй ҡайнатыу ҡорамалы бөтөн Рәсәйгә таралып китә. Аҙаҡ Невьянск заводы хужалары Демидовтар Набатовты төрлө ташламалар менән әүрәтеп, үҙҙәренә эшкә саҡыралар һәм Набатов самауырҙы Демидовтарҙың Соҡсон заводында эшләй башлай. Демидовтар Тула ҡалаһы кешеләре була. Улар менән самауыр Тулаға барып эләгә. Хәҙер инде самауырҙы Тулала күпләп эшләй башлайҙар һәм хәҙер бөтә донъяға таралған "Тула самауырҙары" барлыҡҡа килә.

Шулай итеп, "урыҫ самауыры" тигән ҡорамалдың донъяға таралыуына ла башҡорттар сәбәпсе булып сыға. Ҙур ҡорһағында "Ирген заводы. 1741 йыл" тигән яҙыулы самауыр иң боронғо Рәсәй самауыры һанала. Ә был самауыр башҡорттарға Ҡытайҙан килеп эләккән була. Рәсәйҙә күпләп етештерелә башлағандан һуң да әле, сауҙа йәки икенсе берәй донъя мәшәҡәттәре менән барып сыҡҡандарында башҡорттар самауырҙы Ҡытайҙан, Ирандан алып ҡайтыр булған.

Самауырҙы урыҫтарға тиклем күпкә алдараҡ шулай уҡ Иранда ла эшләгәндәр. Был турала беҙҙең көндәргә килеп еткән тарихи сығанаҡтарҙа мәғлүмәттәр һаҡланған. Ҡытай, Иран самауырҙарының көнсығыш халыҡтарына ғына хас оригиналь формалары ылыҡтырғандыр алыҫ ерҙән самауыр ташырға. Билдәле ҡурайсы Юлай Ғәйнетдиновтың олатаһы тураһында һөйләгән бер мәғлүмәте иғтибарға лайыҡ. Уның ата-бабаларының 19-сы быуатта йәшәгән береһе - Ниғмәтулла Саньяров Ҡытайға йөрөгән һәм унан ике еҙ самауыр алып ҡайтҡан булған. Хатта Ҡытайҙан бер ҡыҙ алып ҡайтып, мулла саҡыртып, уға Шөкөрбикә тигән исем ҡуштырып, кәләш итеп алып, тетттерел донъя көтөп ятҡан ул үҙ заманында.

Тимәк, беҙҙең халыҡ элек-электән Ҡытай, Иран менән сауҙа итеп, унан төрлө тауар, шул иҫәптән самауырҙар ҙа ташыуы бер ҙә аптырарлыҡ, булмаҫ хәл түгел. Тик шуныһы үкенесле: был һыу ҡайнатыу ҡорамалын башҡорттар нисек атаны икән? Бәлки, ул "баҡырса" тип аталғандыр? Минең тыуған яҡтарымда сәйнүкте, ниндәй материалдан эшләнеүенә ҡарамаҫтан, "баҡырса" ти торғайнылар, сөнки улар элек баҡырҙан, еҙҙән яһалған булған. Самауырҙың да сәйнүк кеүек үк шул уҡ һыу ҡайнатыу ҡорамалы икәнен иҫтә тотҡанда, баҡырса тип аталыуы бик тә ихтимал. Әммә был тик фараз ғына.

Мине башҡорттоң тарихын ҡабартып күрһәтергә тырышыуҙа, йәиһә бүтән берәй хилафлыҡта ғәйепләргә маташыусылар булыуы ла бар. Шуға күрә, шикләнеүселәр өсөн был мәғлүмәттең ҡайҙан алынғанлығын да яҙып китеү кәрәктер, тип уйлайым. Был мәғлүмәттәр Алексей Иванов тигән авторҙың Мәскәүҙә донъя күргән "Увидеть руский бунт" тигән китабының 186-187-се биттәрендә баҫылған. Ә мин иһә, гәзит уҡыусыларға был фактар ҡыҙыҡ булыр, тигән уйҙан "Киске Өфө"гә ошо мәҡәләмде тәҡдим иттем. Беҙ үҙебеҙҙең халыҡтың Рәсәй дәүләтендәге ролен яҡшы белергә тейешбеҙ. Был беҙгә үҙебеҙҙең лайыҡлы урыныбыҙҙы белеп, аяҡта нык баҫып, кешеләр менән аяҡ терәп һөйләшергә мөмкинлек бирәсәк. Үҙ халҡының тарихын белгән кеше теләһә ниндәй сетеркәле мәлдә лә юғалып ҡалмаҫ, үҙен һәм халҡын яҡлай алыр. Рәсәй тик урыҫ халҡы көсө менән генә төҙөлмәгән. Хәҙер "Рәсәй Федерацияһы" тигән донъяға билдәле оло дәүләтте төҙөүҙә Рәсәйҙең эреле-ваҡлы халыҡтарының бөтәһе лә көсөнән килгәнсе өлөш индергән.

Мин Баймаҡ ҡалаһының 1-се урта мәктәбен беренсе кластан унынсыны бөткәнсе башҡортса уҡып сыҡтым. Хәтеремдә, үткән быуаттың 60-сы йылдарында башҡорт мәктәптәре өсөн сығарылған "Рус әҙәбиәте" тигән китапта граждандар һуғышы ваҡытында Петроградты Юденичтан яҡларға барған башҡорт һалдаттарының бөйөк рус яҙыусыһы Пушкиндың Михайловскийҙағы урыҫ крәҫтиәндәре тарафынан талап, емерелеп, туҙҙырылған музейен йыйнатып, ипкә һалып китеүҙәре турһында мәғлүмәт була торғайны. Был факт хәҙер программанан нишләптер алып ташланған. Был, бәлки, ҡапыл ҡарағанда бәләкәй генә, иғтибарға бигүк лайыҡ булмаған факт кеүек күренәләр. Әммә был бәләкәй генә факт беҙҙең халыҡ ударының, уйлап ҡараһаң, ябай ауыл малайҙарының ниндәй юғары мәҙәниәтле булыуының бер сағыу күрһәткесе бит.

Әйткәндәй, ошондай бәләкәй генә факттарҙан төҙәлмәйме икән күп милләтле оло Рәсәйҙең тарихы? Әгәр сәйәсмәндәр "Рәсәй Федерацияһы" тигән дәүләттең аяҡта ныклы баҫып тороуын теләй икән, мәктәптә уҡытылған Рәсәй тарихын тик урыҫ тарихы рәүешендә генә түгел, ә Рәсәй халыҡтары тарихы булараҡ уҡытырға кәрәк, тип уйлайым. Тарихты белһәк, "Минең халҡым ғына Рәсәй дәүләтен төҙөгән", тигән "мин-минлек" сиренән арынырбыҙ. Бер-беребеҙҙе тиң күреп, ихтирам итергә өйрәнербеҙ. Сөнки кешеләре берен-бере ихтирам итмәгән, үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙә әхлаҡһыҙлыҡ хөкөм һөргән дәүләт тарих арбаһынан төшөп ҡалып, юҡҡа сыға. Быға миҫалдар тарихта бихисап. Боронғо Рим империяһы тарихын иҫегеҙгә төшөрөгөҙ. Урыҫ самауыры тарихы шундай уйҙар тыуҙырҙы, йәмәғәт.

**Зәкирйән ӘМИНЕВ,**
**тарихсы.**

**✓ Авеста һәм башҡорт героик эпостары "Урал батыр" һәм "Аҡбуҙат" текстары араһында айырым персонаждарҙың мөһим һыҙаттарын нәфис тасуирлауға тиклем үк ҙур оҡшашлыҡ күҙәтелә.**



ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Беренсе киҫәк. Боронғо дәүер.

### Дүртенсе бүлек. Көньяҡ Урал гун эпохаһында



Килтерелгән фактттар ошо проблема буйынса С. И. Руденко, С. Е. Малов, Ж. Ғ.Кейекбаев һәм К. Ф. Смирновтарҙың ғилми һығымталарының принципиаль яҡтан хаҡлы булыуын раҫлай. Улар, үҙ ҡарамағында үтә сикләнгән материалдар ғына булыуына ҡарамаҫтан, башҡорт халҡы этногенезының Көньяҡ Уралдың дах-массагет һәм башҡа малсылыҡ менән шөғөлләнгән синхрон ҡәбиләләренең тарихы, мәҙәниәте һәм теле менән туранан-тура бәйле булыуы хаҡында һығымтаға килә. Ошо тема буйынса билдәле булған мәғлүмәттәр, археологик факттар һәм фараздар хәҙерге тарих фәненең ҡаҙаныштары иҫәбенә инә. Ҡыҙғаныҫҡа күрә, совет осорондағы тарих фәнендә өҫтөнлөк иткән, рәсми ҡабул ителгән принциптарға һәм ҡараштарға нигеҙләнгән шаблонлы фекерҙән ситкә тайпыла алмаусы тикшеренеүселәр ошо һығымталарҙы тулыһынса инҡар итте. Беҙ хәҙер башҡорт халҡы этногенезының иртә этаптарын яҡтыртыу йәһәтенән өр-яңы һәм ышаныслы раҫламаларға эйә булдыҡ, уларҙы инҡар итеүҙе тарих фәнендәге етди хата итеп ҡарайбыҙ. Ошо осраҡта боронғо башҡорт мифологияһының зороастризм тип аталған бик боронғо дини-фәлсәфәүи тәғлимәт менән оҡшаш булыуы хаҡындағы яңы мәғлүмәттәрҙе беҙҙең ҡараштарыбыҙҙың хаҡлығына етди дәлил итеп килтерергә була.

### "Урал батыр" эпосы - башҡорттарҙың боронғо ата-бабалары хаҡында ҡиммәтле сығанаҡ

Билдәле булыуынса, зороастризмдың изге яҙмаһы булараҡ, Авеста төрлә баш илаһтарға бағышланған 20-нән ашыу гимндан хасил булған. Сюжет-композиция планы һәм идея йүнәлеше буйынса Авеста һәм башҡорт героик эпостары "Урал батыр" һәм "Аҡбуҙат" текстары араһында айырым персонаждарҙың мөһим һыҙаттарын нәфис тасуирлауға тиклем үк ҙур оҡшашлыҡ күҙәтелә. Әйтергә кәрәк, ошондай билдәләре буйынса эпостарҙың икеһе лә барса башҡа башҡорт эпостарынан айырылып тора, һәм башҡорттар менән йәнәш йәшәгән төрки телле һәм фин-уғыр халыҡтары фольклорында ла уларға яҡын оҡшашлыҡ юҡ. Беҙ быны бары бер сәбәп менән аңлата алабыҙ: башҡорттарҙың иң боронғо ата-бабалары Авестаны яҡшы белгән һәм иҫкә алынған ике башҡорт эпосы - "Урал батыр" һәм "Аҡбуҙат" - эпик әҫәрҙәр булараҡ, Авеста сюжеттарын үҙенсәлекле үҫтереү һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән.

Миҫалдарға күсәйек.

#### Башҡорт фольклоры ("Урал батыр" эпосы)

**1.** "Һомай түҙмәй осҡан, ти,
Бер килгән, ти, киткән, ти;
Тыныс ил, тип, берәмләп
Ҡош-ҡорттарҙы эйәртеп,
Үҙ артынан эркелтеп,
Тағы Уралға килгән, ти;
Шуңа эйәреп Уралда
Ҡош-ҡорт, йәнлек тулған, ти".

*Урал батыр. Башҡорт халыҡ эпосы. - Өфө: Китап, 2013. 138-се бит.*

**2.** "Урал батыр" һәм "Аҡбуҙат" эпостарында Ҡәһҡәһә йыландар батшалығы батшаһы була.

**3.** Урал батыр сәйәхәтенең төп маҡсатына өлгәшеү өсөн Ҡатил һәм Ҡәһҡәһә батшалыҡтарында була, батшалар унын менән көрәшкә һарайҙы һаҡлаусы үгеҙҙе, үҙҙәренең 4 батырын, күп башлы йыландарҙы сығара; ҡояш батшаһы ҡыҙы Һомай уға ҡанатлы ат Аҡбуҙатты бүләк итә, ул артабан Урал батырҙың дуҫы һәм унын төп еңеүҙәренең сығанағы булып китә.

**4.** Үгеҙҙең һынланышы ошолай:
"Ерҙе тырнап, үкереп,
Шылағайын ағыҙып,
Тауҙай үгеҙ килгән, ти.
Урал алдына килеп,
Ҡарап баҫып торған, ти:
-Егет, ергә атмамын,
Сереп, туҙан булғансы,
Елгә осоп бөткәнсе,
Мөгөҙөмдә ҡаҡлармын, -
Тип Уралға әйткән, ти.

*Урал батыр. Башҡорт халыҡ эпосы. - Өфө: Китап, 2013. 45-46-сы биттәр.*



#### Авеста (Дүшәнбе. 1990)

**1.** "Уға ҡыл доға, о Спитама...
Бик күркәм зат Йима,
Бай көтөүҙәр эйәһе,
Хукарья үрендә
Уға салды ҡорбан итеп
Йөҙ айғырҙы, һәм мең
Һыйырҙы, һәм иҫәпһеҙ ҡуй малын".

*(Авеста... 31-се бит).*

**2.** Авестала уға өс башлы Дахака-Йылан тура килә.

*(Авеста... 31-се һ.б. биттәр).*

**3.** Һуғыш һәм еңеү илаһы Вэртрагнаға бағышланған гимнда Вэртрагна кешеләргә көслө ел, алтын мөгөҙлө үгеҙ, аҡ ҡанатлы ат, ярһыу дөйә, ҡоторонған ҡабан суҫҡаһы, гүзәл үҫмер егет, типкес ҡош (бөркөт), һарыҡ бәрәне, кәзә тәкәһе һәм бик күркәм ир рәүешендә килә.

*(Авеста... 93-сө - 109-сы биттәр).*

**4.** Авесталағы үгеҙ образын ҡарағыҙ:
"Килде Заратуштраға
Икенсе ҡат шулай Вэртрагна,
Яралтмышы Ахураның:
Алтын мөгөҙлө үгеҙ булып,
Шундай гүзәл һәм ҡеүәтле,
Шундай, мөгөҙҙәре өҫтөнән
Күтәрелә Ҡеүәт һәм Көс,
-Килде шулай Вэртрагна,
Яралтмышы Ахураның..."
Шулай уҡ ҡабан суҫҡаһының образын ҡарағыҙ:
"Килде Заратуштраға
Бишенсе ҡат Вэртрагна".
"Яралтмышы Ахураның,
Ҡоторонған ҡабан булып,
Үсал, осло тешле,
Һәм, үткер ҡаҙыҡ тештәрен ҡаҙап,
Һә тигәнсе аяҡтан йыға алыусы,
Ярһыу, яҡын барырлыҡ түгел,
Асыулы, сыбар моронло,
Сос, йылғыр булып,
-Килде шулай Вэртрагна"

*(Авеста... 121-се бит).*

**Нияз МӘЖИТОВ. Әлфиә СОЛТАНОВА.**
**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**

---

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 78



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Калинковичи-Мозырь һөжүм итеү операцияһы. Мозырь рейды

58-се гв. атлы полкы разведчиктары, Моисеевка һәм Слобода ауылдары йүнәлешендә разведкаға барып, Слобода ауылында дошмандың 350 тирәһе һалдаты һәм офицеры, ә Слободкала - 100 кеше булыуын асыҡлай. Тәүҙә Слободка ауылына һөжүм итергә ҡарар ителә. Гвардия өлкән лейтенанты Николай Корсун эскадроны ауылға көнсығыштан, ә гвардия өлкән лейтенанты Петра Язенконың яугирҙары - көнбайыштан яҡынлаша. Ауылдан көньяҡ-көнбайыштараҡ артиллеристар позиция биләй. Уларға Малое Зимовище ауылында немецтарҙың танкылары булыуы хаҡында мәғлүмәт бирелә. Беҙҙең яугирҙарҙың атакаһы уңышлы тамамлана: немецтарҙың бер төркөмө, паникаға бирелеп, ауылды ҡалдырып китә. Уларҙан байтаҡ трофей ҡала: аҙыҡ-түлек склады, 50 баш мал-тыуар, 4 пулемет, 12 йөк арбаһы, 35 ат.

Слобода - ҙур ауылдарҙан, бында дошмандың көслө гарнизоны тора. Шуға күрә ошо ауылға бер юлы ике атлы полк көстәре һәм артиллеристар менән бергәләп һөжүм итеү ҡулайлы тип табыла. 58-се гв. атлы полкы көньяҡтан һәм көньяҡ-көнсығыштан, ә 62-се гв. атлы полкы төньяҡ-көнбайыштан бер үк ваҡытта һөжүм башлай. Немецтар өсөн дивизияның ошо һөжүме көтөлмәгәнсә була, сөнки улар ошо һаҙлыҡлы районға атлы ғәскәр үтеп инә алмаҫ, тип уйлай.

Слободкалағы атыш тауыштарын ишетеп, дошмандың Слободалағы гарнизоны - 1186-сы пехота полкының бер батальоны - оборонаға әҙерләнеп өлгөрә һәм беҙҙең 58-се һәм 62-се полктар яугирҙарын автомат уты менән ҡаршылай. Гвардия өлкән лейтенанты Н. А. Кузьменконың эскадроны (62-се гв. атлы полкынан) Слобода ауылының көнбайыш ҡырыйынан, 58-се гв. атлы полкы - көнсығыш яғынан ауылға бәреп инә. Урамдарҙа ҡул һуғышы башлана. 62-се гв. атлы полкының эскадрон командиры, гвардия өлкән лейтенанты Асаф Кәримовтың яугирҙары айырыуса ҡыйыу алыша. Гвардия лейтенанты Ф. В. Корнонын атлылары дошмандың ике взвод һалдатын сафтан сығара. Был алышта ошо взвод яугирҙары Нурулла Солтанов, Һиҙиәт Ишкинин, Йәнғәле Кәримов, Сидорчук, Аҫылбәков һәм башҡалар йән аямай дошманға ябырыла. Төнгә алыш өс сәғәт буйына бара. Таң атыуға инде ауыл оккупанттарҙан тулыһынса азат ителә. Ошо алышта дошман 100-ҙән ашыу һалдатын юғалта. Унын 3 аҙыҡ-түлек һәм кейем склады, 70 аты, 80 баш һыйыр малы, йөҙәрләгән автоматтары һәм винтовкалары трофейға алына. Слободка һәм Слобода ауылдары дошмандан таҙартылыу менән дивизия политбүлеге ошо ауылдарҙа йәшәүсе кешеләр менән сход үҙғара. Азат ителгән белорус ҡарттары, ҡатын-ҡыҙҙары һәм балалары совет яугирҙарына сикһеҙ рәхмәттәрен белдерә, немец фашистарының яуызлығы, ҡанһыҙлығы хаҡында мәғлүмәт бирә.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Әле беҙ Ерҙә 3-сө үлсәмдә йәшәбеҙ. Шул уҡ ваҡытта арабыҙҙа 4-се үлсәмгә күскән кешеләр ҙә бар. Ғайса бәйғәмбәр һыу өҫтөнән йөрөй алған кеүек, дүртенсе үлсәмгә күскәндәр ҙә һыу өҫтөнән ҡурҡмай атлап йөрөй.*



# ҺҮҘЕНДЕҢ КӨСӨ БУЛҺЫН, уны кире уйҙар менән бысратма!

**Әлеге ваҡытта Балыҡтар дәүеренең Һыуғояр дәүеренә күсеү осоро бара һәм ул 2021-2023 йылдарҙа дауам итә, ти ошо өлкәне өйрәнеүселәр. "Һыуғоярҙар эраһы - ул белемле, мәҙәни, мәғрифәтле, мөхәббәтле кешеләр заманы. Һыуғоярҙар дәүере кешеләре әйләнә-тирәһендә тәртип булдыра, үҙенең ғүмере, йәшәйеше, хатта Ер шарындағы именлек өсөн яуаплылыҡ ала, бар кешелеккә Һөйөү энергияһын йүнәлтә. Осраҡлылыҡтар булмай икәнен белеп, барыһын да белеменә, аңына, Һөйөү менән һуғарылған асылына таянып эшләй", - тип яҙғайныҡ гәзитебеҙҙең былтырғы һуңғы һанында. Бөгөн ошо темаға һөйләшеүҙе космоэнергетика прогрессоры Рауфан МОРТАЗИН менән дауам итәбеҙ.**

**Космоэнергетика тәғлимәтенә нигеҙләнеп, һеҙ ҙә Ерҙең бер үлсәмдән икенсеһенә күсеүе тураһында мәғлүм итәһегеҙ, кешенең ыңғай, яҡшы, рухи яҡтан үҫешен, гармонияла, мөхәббәттә йәшәүен пропагандалайһығыҙ. Шулай уҡ Һыуғояр дәүере лә ошо сифаттарҙы алға һөрөү менән бер рәттән, яһалма интеллект барлыҡҡа киләсәк, фән үҫешәсәк, яңынан-яңы фәнни асыштар буласаҡ, тип фаразлай. Әммә ысынбарлыҡта еңеллек тойолмай…**

- Гәзит уҡыусыларға аңлашылһын өсөн башта үлсәмдәр тураһында аңлатып китәйек. Йыһанда беҙ, кешеләр генә түгел, башҡа йән эйәләре лә йәшәй, әммә беҙ уларҙы күрмәйбеҙ, сөнки улар икенсе үлсәмдәрҙәләр һәм бындай үлсәмдәр бик күп. Мәҫәлән, беҙ бик йыш фәрештәләр тураһында һөйләйбеҙ, ысынбарлыҡта улар бар һәм 5-се үлсәмдә йәшәй. Архангелдар - етенселә. Беҙ китаптарын яратып уҡыған Крайон 9-сы үлсәмдә. Беҙҙең ғаләм менән лорд һәм леди Райза идара итә, тиҙәр, улар 500-сө үлсәмдә. Үлсәмдәр ни тиклем юғарыраҡ, уларҙа шул тиклем мөхәббәт, яҡтылыҡ, изгелек, энергия күберәк була бара.

Әле беҙ Ерҙә 3-сө үлсәмдә йәшәбеҙ. Шул уҡ ваҡытта арабыҙҙа 4-се үлсәмгә күскән кешеләр ҙә бар. Ғайса бәйғәмбәр һыу өҫтөнән йөрөй алған кеүек, дүртенсе үлсәмгә күскәндәр ҙә һыу өҫтөнән ҡурҡмай атлап йөрөй. Ундай кешеләр Ер шарында күбәйгәндән-күбәйә. 5-се үлсәмгә күсеүселәр ҙә, кире ҡайтыусылар ҙа бар. Бынан сама менән 7-8 йыл элек Тибетта 2000 монах йыйылып, 5-се үлсәмгә күсә һәм улар Ерҙән юғала. Күпмелер ваҡыттан һуң уларҙың 1200-ө кире Ергә ҡайта, 800-ө Ер тирәһендә 5-се үлсәмдә тороп ҡала. Ошо әйләнеп ҡайтыусылар һаман да мантралар уҡып, Ерҙең тирбәлешен, беҙҙең аңды юғарыраҡ күтәрергә ярҙам итә, төрлө илдәргә барып, семинарҙар, тренингтар үткәрә. Береһе йыл һайын Мәскәүгә лә килеп йөрөй.

Был тәжрибәне улар ни өсөн үткәргәндәр? Ерҙең 5-се үлсәмгә күсергә әҙерме, түгелме икәнен белер өсөн. 2000 монах 5-се үлсәмгә күсә алғас, башҡалар ҙа күсә ала, әммә уларҙы әҙерләргә кәрәк. Әҙер булыу өсөн ҡурҡыу тойғоһонан арыныу зарур.

2013 йылдың яҙында водород атомының диаметры 4 процентҡа кәмене. Водород атомы - ул һыу. Кеше нигеҙҙә һыуҙан торғас, тимәк, беҙҙең органика ла, шул иҫәптән беҙ ҙә үҙгәрәбеҙ. Быны кешеләрҙең оҙағыраҡ йәшәүендә һәм тиҙ ҡартаймауында ла күрәбеҙ. Мәҫәлән, беҙ бәләкәй саҡта 60 йәшлектәр ҡарт әбей-бабайҙар ине, хәҙер улар йәшендәгеләр үтә йәш күренә, күңелдәре лә 18 йәшлектәрҙеке һымаҡ. Һуңғы 10 йылда биология ла ныҡ үҙгәрҙе, ошо осорҙа ДНК, молекула, атом буйынса бик күп яңы асыштар булды. Беҙҙең, 5-се расаның ДНК-һы 12 булырға тейеш булһа, ул икәүгә генә ҡалдырылғайны. Хәҙер йылдан-йыл башҡа ДНК-ларыбыҙ асылғандан-асыла бара, был иһә кешеләрҙең телепатия, телепортация кеүек һәләттәре асылыуға килтерә. Бигерәк тә был сифатты бәләкәй балаларҙа күҙәтергә мөмкин. Улар 4-5-се үлсәмде күрә ала, өй эйәһен күрә, уның менән һөйләшә. Шундай мөғжизәле заман.

Киләсәктә беҙҙе нимә көтә? Һуңғы йылдарҙа бик йыш ошо һорауҙы бирәләр. Хәҙер бик ҡатмарлы ваҡыт, сөнки күсеү осоро бер ваҡытта ла еңел булмай. Әлеге ваҡытта Ер менән Йәшерен ҡара хөкүмәт (глубинное государство) идара итә. Беҙ әле һаман уларҙың тәртибе буйынса йәшәйбеҙ, уларҙың йоғонтоһонан сыҡмағанбыҙ. Шул уҡ ваҡытта хәҙер ергә күберәк яҡты көстәр килә, яҡты энергиялар бирелә. Ерҙең тирбәлеше үҫкәндән-үҫә - был иң яҡшы яңылыҡ. 1987 йылға тиклем ерҙең тирбәлеше 7,8 герц ине, ошо йылдарҙа ул артҡандан-арта.

Иң ауыр осорҙо 2020 йылда кисерҙек, сөнки ул нуль менән тамамлана. Тап ошо йылда тажзәхмәт сирен тараттылар. Донъяла биолабораториялар бик күп һәм ковид - ул яһалма тыуҙырылған вирус булды.

2021 йылда бер һаны килеп сыҡты - ул да ауыр йыл булды, әммә нулгә ҡарағанда яҡшыраҡ. 2022 йылда 2 килеп сыҡты - ул бергә ҡарағанда ике тапҡырға һәйбәтерәк, сөнки Ерҙә Яҡтылыҡ менән Ҡара көстәрҙең ҡаршы тороуы (борьба Света и Тьмы) Махсус хәрби операция (СВО) менән башланды. Йәшерен ҡара хөкүмәткә буйһоноуҙан беренсе булып Рәсәй сыҡты, беренсе булып баш күтәрҙе. Махсус операция - ул Рәсәй менән Украина һуғышы, хатта Рәсәй менән НАТО көрәше лә түгел. Башҡа илдәр әлеге ваҡытта барыһы ла Рәсәйгә ышаныс менән ҡарай, ҡабат тубыҡланмағыҙ, ти. Әммә Йәшерен ҡара хөкүмәт беҙгә тын алыу мөмкинлеге бирмәҫкә тырыша, бының өсөн төрлө санкциялар ҡулланыла, ләкин Рәсәй бай, халыҡ көслө һәм беҙ еңеп сығасаҡбыҙ, сөнки тап Рәсәйгә яҡты көстәр ярҙам итә һәм һаҡлай.

2023 йылда 3 һаны килеп сыға, 3 - ул ҡәнәғәтләнеү билдәһе, үҙгәрештәр ыңғай яҡҡа бара. Шулай ҙа ауырлыҡтар бөтмәй әле. 2024 йыл - яҡшыраҡ, 2025 йылда "бик яҡшы" билдәһе килеп сыға, әммә барыһы ла яҡшы тип әйтеп булмай, сөнки кешенең аңы үҙгәрһә лә, иҡтисадты күтәрергә кәрәк була әле. Иҡтисади йәһәттән ошо Йәшерен ҡара хөкүмәттең йоғонтоһонан сыҡһаҡ, технологиялар, хатта мәңгелек двигатель күптән бар. Әле ундай асыштарҙы ҡулланырға Йәшерен ҡара хөкүмәт рөхсәт итмәй, әммә киләсәктә беҙ уларҙың барыһын да ҡулланасаҡбыҙ. Хәҙер күп кешелә борсолоу, ҡурҡыу тойғоһо бар, сөнки улар күсеү осоронда ниндәй ваҡиғалар барғанын аңламай. Әммә хәл-торош йылдан-йыл яҡшыра бара, киләсәктә тағы ла яҡшыраҡ буласаҡ.

Мин 20 йыл космоэнергетика менән шөғөлләнәм, әлегә тиклем дауалап булмай торған сирҙе осратҡаным юҡ. Космоэнергетика йыһандан, сығанаҡтан килгән нурҙарҙы ҡуллана һәм был киләсәк медицинаһы. Скальпель кәрәкмәйәсәк, әйткәндәй, ул бөгөн дә кәрәкмәй. Бөйөрҙә, үт ҡыуығында булған таштар, киста, миома юҡҡа сыға, сөнки эфир тән нормаға керә. Эфир тән нормалләшә икән, физик тән дә нормаға керә - физик тән эфир тәндең күсермәһе. Шулай уҡ сеанстарға йөрөгәндәрҙең астраль тәне - тойғолар тәне, менталь тәне - уйҙар тәне, каузаль тәне нормаға керә, һөҙөмтәлә тормош та нормалләшә. Шулай итеп, бер ниндәй ҙә дарыу кәрәкмәй, киләсәктә беҙ аң менән дауаланасаҡбыҙ. Кешенең аңының әһәмиәте бик ҙур, беҙ уны белмәйбеҙ, беҙгә элек-электән "Һеҙ ҡол, һеҙ гонаһлы", тип мейегә һеңдергәндәр. Шуның өсөн кеше әле һаман үҙенең бөйөклөгөн аңламай. Шул уҡ ваҡытта уянған, аңлаған кешеләр, мәҫәлән, Анатолий Вострецов (йәш сағында бөйөрөнә операция эшләп, алған булғандар) 65 йәшендә бөйөрөн яңынан матдиләштерә. Шундай, булмаған ағзаны матдиләштергән осраҡтар күп. Әммә быныӊ өсөн кешенең һүҙенең көсө булырға тейеш. Ә күп кеше үҙенең һүҙенең көсөн юғалтҡан, үкенескә ҡаршы.

**Һүҙ көсө тинегеҙ, ул нисек булырға тейеш…**

- Мәҫәлән, кеше "Мин - ҡол", тип әйтә икән, ул шунда уҡ һүҙ көсөн юғалта, сөнки ҡолдоң һүҙ көсө, хатта һүҙ әйтергә хоҡуғы юҡ, булырға тейеш түгел. Диндә булған күптәрҙән "Беҙ - Аллаһ ҡоло", тигәнде ишетергә тура килә. Аллаһ - ул ҡол биләүсе түгел, уға ҡолдар кәрәкмәй. Киреһенсә, ул барлыҡ кешенең шатланып-ҡыуанып йәшәгәнен теләй. Кеше шатланып-ҡыуанып йәшәһә, уның тирбәлеше күтәрелә, тирбәлеше күтәрелһә, шаяртһа, йылмайһа, эргәһендәге кешеләрҙең тирбәлеше күтәрелә, тимәк, Ерҙең, барлыҡ йыһандың тирбәлеше күтәрелә. Беҙ тормошто үҙебеҙ ҡатмарлаштырабыҙ, ә унда йәшәү еңел, барыһы ла ябай ғына. Бары тик һүҙҙең көсөн кире ҡайтарыу бик мөһим. Әгәр һүҙ көсөн кире ҡайтарһа, ул саҡта кеше төрлө мөғжизәләр барлыҡҡа килтерә, мәҫәлән, төрлө нәмәләрҙе матдиләштерә ала. Ундайҙар хәҙер күбәйгәндән-күбәйә.

**2020 йыл тураһында нуль - насар, буш йыл тинегеҙ. Киләсәктә барыбер шул нолгә тағы ла барып етәбеҙ бит… Унда ниндәй киләсәк көтә, ваҡиғалар циклдар буйынса ҡабатланып торамы?**

- Ул саҡта нуль - бөтөнлөктө, артабанғы һандар йылдан-йыл яҡшыра барыуҙы аңлата.

**Хәҙерге ваҡытта барлыҡ халыҡтың бер генә теләге барҙыр, моғайын, тиҙерәк хәрби хәрәкәттәр тамамланһын. Был мәсьәләгә фаразығыҙ ниндәй?**



- Бик әһәмиәтле һорау, сөнки барса халыҡ шуны көтә. Әммә был көрәште кинәт туҡтатырға ярамай. 2022 йыл алдынан, пандемия була, тип иҫкәрттеләр. Махсус операция башланғайны - пандемия бөттө. Халыҡ саҡ ҡына тынысланғайны, пандемия көҙ көнө була, тип иҫкәрттеләр. Мобилизация иғлан ителгәйне - пандемия бөттө. Рәсәйҙә генә түгел, бөтә Ер шары буйынса пандемия булманы. Махсус операцияның иң ҙур әһәмиәте шунда, сөнки ул башланмаһа, Йәшерен ҡара хөкүмәт пандемия иғлан итер һәм тағы ла битлектәр кейергә мәжбүр булыр инек. Ковид һәм сикләүҙәр һөҙөмтәһендә Рәсәйҙә халыҡ 1 миллион самаһына кәмене, сөнки кешелә ҡурҡыу тойғоһо тыуҙырылды, ҡурҡыу кешене үлтерә. Күптәр үҙҡурсаланыуға күсте, ә күп фатирлы йорттарҙа юғары ҡаттарҙа йәшәү - ул организмға ныҡ зыян килтерә, сөнки беҙҙең биология, ДНК магнитлы. Тимәк, беҙ ерҙә атлап йөрөргә, ергә яҡыныраҡ йәшәргә тейешбеҙ. Ни өсөн оло әбей-бабайҙар йәй көнө эскәмйәгә булһа ла сығып ултыралар йәки урамда йөрөргә тырышалар. Кешегә магнит энергияһын арттырыу мотлаҡ. Ҡара көстәр был хаҡта белә һәм шуға күрә ошо сикләүҙәрҙе индерҙе.

Был бәрелеш ҡасан бөтәсәк? Европа халҡы уянғас. Хәҙер унда уяна, аңлай башланылар. Халыҡ уяна, баш күтәрә, забастовкалар башлана һәм улар ни өсөн нацистик Украинаға ярҙам итәһегеҙ тигән һорау бирә, Рәсәйҙең беренсе булып Йәшерен ҡара хөкүмәткә ҡаршы баҫҡанын аңлай, бөтөн Ер шары буйлап халыҡ Рәсәйҙе хуплай башлай. Был процесс бер башланһа, ул геометрик прогрессия буйынса үҫә. Быйыл яҙҙан башлап ыңғай ваҡиғалар күп буласаҡ. Был тап Рәсәй менән бәйләнгән һәм күп илдәр беҙгә икенсе күҙлектән ҡарай башлаясаҡ.

Хәҙер Ҡытай, Һиндостан, Сәғүд Ғәрәбстаны, башҡа илдәр ҙә Рәсәй яғына күсә, долларҙан ҡотолорға тырыша. Күптәр, долларҙы Америка сығара, тип уйлай. Америка түгел, ә ФРС - ул тап ошо Йәше-

✓ *Ситтән йоғонто яһап бер кеше лә беҙҙең аураны бысрата алмай. Кеше уны үҙе насар уйҙар, насар тойғолар менән бысрата. Хәҙер хатта ғалимдар ҙа насар уй - ул бысраҡ энергия, тип белдерә.*



рен ҡара хөкүмәттең бер ағзаһы. Уның етәкселәре - шәхси кешеләр, уларҙың урынлаштырған тәртибе буйынса ерҙә булған бөтөн нәмә, бөтә байлыҡ, бөтә ресурстар - нефть, газ, алмас, алтын һ.б. - уларҙыҡы булырға тейеш һәм улар доллар арҡаһында ерҙең барлыҡ ресурстарын, ғалимдарҙы һатып алалар. Хәҙер доллар заманы яйлап-яйлап һуңғы көндәренә яҡынлаша. Күп илдәр үҙҙәренең милли валютаһын көсәйтә һәм уның менән алыш-биреш итә.

**Өсөнсө үлсәмдән юғарыраҡ үлсәмгә күсеү өсөн халыҡ нимә эшләргә тейеш, йәғни халыҡты нисек аңға ҡайтарырға? Әле аңдары асылып етмәгәндәр бик күптер бит...**

- Бында дөрөҫ мәғлүмәтте таба белергә, дөрөҫ мәғлүмәтте уҡырға кәрәк, сөнки телевизор-радио, башҡа киң мәғлүмәт саралары был хаҡта әйтмәйәсәк - улар барыһы ла Йәшерен ҡара хөкүмәткә буйһона. Мин рухиәтте күтәрә торған сайттағы мәғлүмәттәрҙе уҡырға тәҡдим итер инем. Мәҫәлән, "Держава света". Ул Рәсәй сайты, бәлки, унда яҙылғандарҙы ҡабул итеүе ауырыраҡтыр, әммә дөрөҫөн яҙалар. Шул уҡ ваҡытта был сайттарҙа ла мәғлүмәт 100 процентҡа дөрөҫ тип ҡабул итергә ярамай. Төрлө рухи сайттарҙы уҡып, паздан бер картина төҙөгән кеүек, сағыштырмаса дөрөҫ мәғлүмәт табырға була.

Шулай уҡ бына 1989 йылда Крайондың "Последние времена" тигән китабы сыҡҡайны. Шундағы мәғлүмәттең барыһы ла тормошҡа ашып килә. Ул ваҡытта Крайон үҙенең магнетизм хеҙмәтенең Ер менән эшләйәсәге тураһында яҙа. Һәм ул Ерҙең көсәрен үҙгәртеүе, тирбәлешен күтәреүе тураһында белдерә. Был процестар әле дауам итә. Һөҙөмтәлә һәләтле балалар тыуа һәм кешелә рухиәтлек артасаҡ. Әлеге ваҡытта ошолар тормошҡа аша.

**Рухиәт, тигәндә, уны күптәр дини белем, дини ғилем тип аңлай. Ғәмәлдә нимә ул рухиәтлек?**

- Үкенескә күрә, рухиәтлек - ул дини ғилем түгел, сөнки Йәшерен ҡара хөкүмәт барлыҡ институттарға, шул иҫәптән дингә лә ныҡ тәьҫир итә. Хәҙерге заманда барыһы ла юрғанды үҙҙәренә тарта. Йәғни - йотоусылар, ҡулланыусылар. Ғәмәлдә иһә, беҙ - булдырыусылар. Әгәр кеше үҙенең булдырыусы, ижад итеүсе икәнлеген аңлаһа, ул үҙенең аңы менән бөтөн нәмәне барлыҡҡа килтерә. Яҡты көстәрҙе алғанда, улар юрғанды үҙҙәренә тартмай, ә киреһенсә, башҡаларға ябырға тырышалар. Ҡояш нурын барыһына ла тигеҙ һибә бит. Рухиәтле кеше - ошо ҡояш һымаҡ, барыһын да тиң күрә, барыһына ла изгелекле. Ә кемгәләр буйһоноп, тубыкта теҙләнеп тормай.

**Хәҙер күп нәмә матди етешлеккә бәйләнгән. Кеше бер-береһе менән ярышып матди байлыҡ йыя. Шул уҡ ваҡытта һуңғы ваҡиғалар күрһәтеүенсә, хатта ауылдарҙа бәләкәй генә пенсия алыусы әбей-бабайҙар ҙа хәрби хәрәкәттәрҙәге егеттәргә ярҙам йөҙөнән аҡса бирә, ҡулынан килгән ярҙам күрһәтә.**

- Беҙ үҫеш, үҙебеҙҙең һәләттәребеҙҙе арттырыу һәм йыйыу өсөн тыуғанбыҙ. Балалар бәләкәй саҡтан нимәләр йыя башлай - открытка, уйынсыҡ, үҫә барған һайын талаптар арта һәм аҙаҡ ул матди әйберҙәр йыйыуға әүерелә. Кеше миллиардер булыуы мөмкин, әммә үлем алдынан бәхеттең аҡсала түгел икәнлеген аңлай. Бөтөнләй икенсе нәмә йыйырға кәрәк булған икән. Ә икенсе нәмә нимә ул? Беҙҙең каузаль тәндә рәхмәттәр аккумуляторы бар. Унда барлыҡ рәхмәттәр йыйылып бара. Беҙ шуны тулыландырырға, рәхмәттәр менән байырға тырышырға тейешбеҙ. Ни тиклем күберәк рәхмәт алабыҙ, аккумулятор ҙурая, киңәйә һәм унда тупланған рәхмәт бер тормоштан икенсеһенә күсә бара. Әгәр йән бер тапҡыр ғына йәшәһә, уның әһәмиәте булмаҫ ине, әммә йән күп тапҡыр йәшәй һәм ошо рәхмәттәрҙең әһәмиәте ҙур. Рәхмәттәр йыйынтығы тулы булһа, ул - сәләмәтлек, ул - ғаилә именлеге, ул - рухи һәм матди байлыҡ.

Шул уҡ матди әйберҙәр ҙә кәрәк. Уйлап ҡараһаҡ, йыһан ул сикһеҙ, унда бөтә нәмә бар. Мәҫәлән, яҙын бер бойҙай сәсһәк, көҙөн бер башаҡтан йөҙ бойҙай алабыҙ. Ике балыҡты һыуға ебәрһәк, көҙгә унда, бәлки, йөҙәр меҙ балыҡ булыр. Бер емеш ағасы ултыртһаҡ, көҙгә күпме емеш йыябыҙ. Матди яҡ та булырға тейеш, һәм кеше үҙенә күпме кәрәк - шунса ҡулланырға тейеш.

**Ә нисек рәхмәт алырға? Кемдер ала белә, кемдер белмәй...**

- Әгәр ҙә беҙ ерҙең ресурстарын арттырабыҙ икән, беҙгә күберәк бирәләр. Киреһенсә, ерҙең ресурстарын кәметергә тырышҡанда - шул уҡ нефтте, шул уҡ газды, ҡаҙылма байлыҡтарҙы, урмандарҙы - был, киреһенсә, ярлылыҡҡа килтерә. Шуға күрә ағастарҙы ҡырҡырға ғына түгел, уларҙы ултыртырға, тәбиғәт байлыҡтарын ҡулланырға ғына түгел, уларҙы һаҡларға ла кәрәк. Шул ваҡытта күберәк алаҫаҡбыҙ ҙа.

**Рәхмәттәр тупланмаһына килгәндә, хәҙер бит шундай заман - кемдер уны ихлас күңелдән, ысын йөрәктән әйтә, бәғзеләр ярамһаҡланып йәки мәғәнәһеҙ булып күренмәҫ өсөн генә әйтергә мөмкин. Ошо аккумуляторҙа туплана торған рәхмәт ниндәй булырға тейеш?**

- Ысын күңелдән булырға тейеш, шул уҡ осраҡта кеше рәхмәт әйтмәһә лә була. Иң мөһиме - уның күңелендә рәхмәт тойғоһо, ҡыуаныс тыуһын. Мәҫәлән, балаларға ҡарҙан тау эшләнегеҙ икән, улар шыуған һайын ҡыуана, уларҙың хис-тойғоһо рәхмәт тупланмаһын байытырға ярҙам итә. Бында һүҙ менән әйтеүгә ҡарағанда тойғолар мөһим. Эшләгән изгелеккә рәхмәт көтөргә кәрәкмәй, ә уны эшләүҙән ләззәт табырға кәрәк. Йәғни эшләгән изгелегең кеше генә түгел, үҙең дә ҡыуанырлыҡ булһын.

**Ерҙең тирбәлеше арта, тинегеҙ, тимәк, энергия күп бирелә. Ә ошо тирбәлешкә, көслө энергияға кеше нисек сыҙарға тейеш? Уға әҙер булғандар бар, әҙер булмағандар бар...**

- Юғары тирбәлешкә һәм көслө энергияға әҙерләнергә кәрәк. Мәҫәлән, кеше саунаға инһә, унда температура 100 градус һәм эҫе һымаҡ. Ләкин бер аҙ ултырһа, кеше ошо температураға өйрәнә башлай. Һуңынан температураны күтәрһәләр, эҫе һымаҡ, сығып ҡасҡы килә. Бер аҙҙан тағы ошо температураға өйрәнә. Шуның һымаҡ, тирбәлешкә лә яйлап-яйлап өйрәнәбеҙ. Әммә был тирбәлеш, көслө энергия кешегә, әгәр уның аураһы бысраҡ булһа, насар тәьҫир итеүе мөмкин. Шуға ауранның таҙа булыуы бик мөһим. Ә аура нисек бысрай? Ситтән йоғонто яһап бер кеше лә беҙҙең аураны бысрата алмай. Кеше уны үҙе насар уйҙар, насар тойғолар менән бысрата. Хәҙер хатта ғалимдар ҙа насар уй - ул бысраҡ энергия, тип белдерә. Шуға күрә уйҙар, тойғолар яҡшы, аура таҙа булырға тейеш. Әгәр кеше ҡыуанып-шатланып йәшәһә, иртән тороу менән барыһына ла, барлыҡ тереклеккә мөхәббәт ебәрһә - уның тирбәлеше ныҡ күтәрелә. Кемдең aураһы таҙа, кемдең тирбәлеше юғары, кем барыһына ла изгелек ҡыла, изгелек теләй - уларҙың ауралары таҙа була һәм улар 4-5-се үлсәмгә Ер менән бергә күсә.

**Гәзит уҡыусыларыбыҙға ниндәй теләктәрегеҙҙе еткерерһегеҙ?**

- Ҡурҡыу тойғоһонан арынырға кәрәк, сөнки уны таҡҙахмәт, төрлө вирустар, һуғыштар аша Йәшерен ҡара хөкүмәт таратырға тырыша. Шулай уҡ иҫке программаларҙан арыныу, уларҙан баш тартыу зарур - улар беҙгә ныҡ зыян килтерә. Ергә килгән яҡты энергияларҙы ҡыуанып-шатланып ҡабул итергә кәрәк. Киләсәктә барыһы ла яҡшы буласаҡ, ә бөгөнгө ауырлыҡтар - улар барыһы ла ваҡытлыса. Әгәр кеше шуны аңлаһа, унда ҡурҡыу тойғоһо булмай, уны бер нисек тә, бер нәмә менән дә ҡурҡытып булмай.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**әңгәмәләште.**

*ХӘТЕРЛӘП...*

# ЫШАНМАҒЫҘ БЕҘГӘ, АУЫЛДАР...

**Мәшһүр шағирыбыҙ Әнғәм Атнабаевтың шиғырҙарын йәш сағымдан яратып уҡыйым. Уның төрлө тормош нескәлектәренә иғтибар итеп, уларҙы асыҡ сағылдырған әҫәрҙәрен күп осраҡта тыныс ҡына уҡып та булмай. Халыҡтар дуҫлығы, Тыуған илгә тоғро хеҙмәт, туған тел, ғаилә мөнәсәбәттәре, йәш быуынды тәрбиәләү темаларын һәр саҡ алғы планға ҡуйған был шәхестең ижады илебеҙгә, милләтебеҙ тормошона тәрән һөйөү рухы менән һуғарылған. Уның "Ҡара икмәк" тип аталған шиғырын яттан белмәүселәр һирәктер. "Әсәй миңә ҡара икмәк сәйнәп, имеҙлеккә һалып биргән дә, үҙе киткән урағ урырға. Илағанмын, ләкин сыҙағанмын. Икмәк менән була торорға..." Икмәктең ниндәй көс түгеп табылғанлығы, уның ҡәҙерен белеү мотлаҡлығы хаҡында яҙылған был шиғыр.**



Атаһы яу ҡырында ятып ҡалған, бала сағын ауыр һуғыш йылдары "төпһөҙ ыштан кейеп", аслыҡ-яланғаслыҡта үткәргән был шағирҙың "Кейем юҡлығына түҙеп була, алдап була тамаҡ туҡлығын. Әммә бер ни менән алыштырып булмай икән атай юҡлығын..." тигән шиғыр юлдарын күҙ йәшһеҙ уҡый алмай торғайным (әле лә шулай). Атай ҡәҙерен белеү зарурлығы хаҡында шундай матур итеп яҙған был әҙиптең "Аҡыл сыбығы" исемле шиғырын да әле булһа ҡабат-ҡабат уҡып алам. "Беҙҙең өйҙә бер сыбыҡ бар ине, ҡыҫтырылған ине матсаға. (Ул ҡоралһыҙ мөмкин булмағандыр ете-һигеҙ бала-сағаға). Саманан тыш бик уҙынып китһәк, йә тұҙынып китһәк әрептә, ошо сыбыҡ бер һыҙғырыу менән һала ине беҙҙе тәртипкә...". Йыш ҡына юморҙың да бик урынлы һәм уңай итеп ҡулланылыуы был әҙиптең әҫәрҙәрен тағы ла уҡымлыраҡ итә.

Мәҡәләмде ни өсөн ошо шағирыбыҙҙың ижады менән башлауым да тигенгә түгел. Сөнки уның күп кенә шиғырҙары бөтә илде туйындырып торған әлеге ауыл тормошона бәйләнгән. Ә бит, төптәнерәк уйлап ҡараһаҡ, ауылдарыбыҙ беҙҙе туйындырып ҡына ҡалмай, унда туған телебеҙ, милләтебеҙ бөтөнлөгө һаҡлана. Һәр нәмә сағыштырыуҙа баҙығыраҡ күренә. Үҙе ауылда тыуып үҫкән кеше буларaҡ, шағирыбыҙ үҙенең әҫәрҙәрендә йыш ҡына ауыл тормошон ҡала менән йәнәш ҡуйып һүрәтләй.

Шағирыбыҙҙың "Ышанмағыҙ" тип аталған бер әҫәрен тулыһынса килтерергә булдым. Шағир халҡы ғына түгел, ә ҡасандыр тыуған ауылынан бөтөнләйгә киткән һәр яҡташыбыҙ уны тәрән хистәргә бирелмәй уҡый алмаҫ, тигән инаныуҙамын. "Ҡайтам" тинем, тағы ҡайталманым, мин алданым һине, ауылым; Төҙәлмәҫлек, терелмәҫлек булып ҡала сире менән ауырыным. Ҡала сире һенде аҡылыма, йөрәгемә, бөтә тәнемә, кейемемә, атлап йөрөшөмә, һөйләшемә, гәҙәттәремә... Ҡала сире һеңде, бер дарыу юҡ медицина фәне ҡулында; Аяҡтарым Өфө урамында, хыялдарым Әри буйында. Бер мин генә түгел - башҡалар ҙа, барыбыҙ ҙа, ахыры шундайбыҙ: Торған ҡалабыҙға ғашиҡ булып, тыуған ауылыбыҙҙы уйлайбыҙ. Тыуған ауылыбыҙҙы һағынып, ауыҙ һыуыбыҙҙы ағыҙып, күҙ йәштәрен хатта тамыҙып, "ҡайтам" тиеп йырҙар яҙабыҙ, гонорарын һалып алабыҙ ҙа, ҡалабыҙҙа тороп ҡалабыҙ. Аҡылһыҙҙар беҙҙе аңламайҙар, аҡыллылар беҙҙән көләләр. Шағирҙар бит ауылдарҙа тыуа, ҡалаларға килеп үләләр. "Бөтөнләйгә инде ҡайтам", тиһәк, ышанмағыҙ беҙгә ауылдар; Уларыбыҙ терелмәҫлек булып, ҡала сире менән ауырыған". "Көслө заттан" булыуыма ҡарамаҫтан, ошо шиғырҙы уҡып бөтөүемә, ғәҙәттә, минең биттәрем күҙ йәшенә мансылған була ...

Саф башҡортса һөйләшеүсе, хатта бөтөнләйгә таныш та булмаған берәүҙе ҡала ерендә осратһаң, һис кенә икеләнмәй, ул кешенең ауылда тыуып үҫкәнлеге хаҡында фаразларға була. Таныша башлағанда уҡ уның ҡайһы районда булыуы хаҡында ҡыҙыҡһынып, уны элекке танышыңдай яҡын күрә башлауыңды һиҙмәй ҙә ҡалаһың. Әңгәмә йыш ҡына ауыл хәлдәре хаҡында бара. Бер-береңә бирелгән һорауҙар, яҡынса, ошолайыраҡ була инде: "Туғандарығыҙ ауылда бармы? Мал-тыуырҙары ишлеме? Бесән нисек икән быйыл? Ауылығыҙҙа йәштәр күпме? Фермерсылыҡ менән шөғөл итеүселәр ҙә барҙыр, ситкә китеүселәр ҙә етерлектер инде?... Нисә йыллыҡ мәктәбегеҙ бар?"

Үҙеңдең инде тиҫтәләгән йылдар элек ауылдан (бөтөнләйгә!) киткәнеңде бер аҙ онота биреп, алтын бала сағыңда яланаяҡ йүгереп йөрөгән болондарыңды, дуҫ-иштәреңде иҫләй-иҫләй, ауыл урамы буйлап еңгәйҙәреңде көйәнтә аҫып һыуға барғандарын, урам тышындағы эскәмйәләрҙә һөйләшеп ултырған олатайҙар, инәйҙәрҙе күҙ алдына килтерә-килтерә был яҡташың менән гәпләшеп туя алмайһың. Ағайҙарҙың ат егелгән арбаға бер нисә баланан торған ғаиләнен тейәп, келтерҙәп бесәнгә юлланғандары бөгөнгөләй күҙ алдына килеп баҫа, күңел тула. Һәр ихата тиерлек тулы бала-сағаның сыр-сыуы ҡолаҡ төбөндә сыңлап киткәндәй була. Әңгәмәсең бер аҙҙан "Ярай, ағай, минең фәлән ергә барағым бар..." тип һине ташлап китә башлағас, берәй кинофильмдың иң ҡыҙыҡлы урынында кинәт кенә туҡталып ҡалыуы һымағыраҡ хистәр кисерһең. Хатта ауылға хәҙер уҡ ҡайтҡың килеп китә. Әммә, ян-яғыңдағы ҡала шау-шыуы бындай несҡә тойғоларыңды йәһәт кенә күмеп тә ҡуя...

(Дауамы 11-се биттә).

***✓ Һуғыш бөткәнсе, ғәмһеҙ генә донъя көтөп ятырға ине ниәте. Ләкин эш үҙе уйлағанса барып сыҡманы: старателдәрҙең күбеһе кәйлә-көрәктәрен - мылтыҡҡа, һары балсыҡҡа буялған брезент көпөләрен шинелгә алмаштырҙы.***




## I

1942 йылдың августы. Колхоздың йылҡы көтөүсеһе Ғилмишәриф менән ошоғаса Суртан приискыһында старателдәрҙән алтын ҡабул итеүсе булып эшләгән "Мәте" ҡушаматлы Заһретдин бер купеға эләкте. Армияға алыныусыларҙы теплушкаларға тейәп оҙатһалар ҙа, былар нишләптер ултырып, хатта ятып бара торған вагонға тура килде. Ғилмишәриф, ҡайыш менән уратып быуылған һары сумаҙанын көскә вагонға һөйрәп инеп килеүсе ауылдашын күргәс тә шатлығынан:

- Ә, Заһретдин ағай, һаумы! - тип һөрәнләп ебәрҙе. Тегеһе Ғилмишәрифкә күҙ һирпеп алды ла:

- Һау, һау! - тип ауыҙ эсенән мығырҙаны.

- Һин, ағай, вәйәнкәматта күренмәгәйнең, мына бергә килеп эләктек! Ҡайһылай ҙа йәтеш булды, - тип Ғилмишәриф өҙөлөп ҡалған хәбәрҙе ялғарға тырышты. - Һин дә, ағай, армиәгә китеп барыуҙыр бит?

- Кәнишнә, әрмиәгә! Әллә өләпсәңә ҡунаҡҡа бара тип уйлағайныңмы? - тип ул яуабын ҡырт киҫеп, һүҙҙе сомторайтырға самаланы.

Бите көнгә ялтырап янған Ғилмишәриф, моҡсайын аяҡ араһына ҡыҫтырып, ауылдашы ҡаршыһына ултырҙы. Уның өҫтө-башы ла мөсһөҙ генә. Заһретдиндың диҡҡәт менән ҡарауынан оялыпмы, Ғилмишәриф ҡулдан тегелгән, гармун күреге шикелле сырышып бөткән кәзәкиен, ҡайышланып бөткән салбар балаҡтарын һыпырып алды. Ә Заһретдиндың йәне көйә: "Исмаһам, бер йүнле кеше менән эләгеп булманы. Өҫ-башы ни рәүешле бит!"

Быларҙы билдәһеҙ тарафтарға алып китәһе паровоз, ҡайғылы тауыш сығарып, гудогын ҡысҡыртты, йөгөн самалаған ҡарт ат шикелле, бер нисә тапҡыр алға-артҡа сигенеп алды ла урынынан ҡуҙғалды. Заһретдин тәҙрәгә ҡапланды - ҡатыны Маһитап оҙатырға килгәйне, тубығына хром йәбештереп тегелгән галифеһынан сигеүле батист ҡулъяулығын сығарып, вагон артынан йүгерә-атлай килгән бисәһенә болғаны-болғаны ла, тегеһе күҙҙән юғалғас, күҙ йәштәрен һөртөп, кире урынына ултырҙы. Йәшел фуражкаһын алып, сәсе ҡойола башлаған ялтыр башын һөртөп алды, тағы урынынан тороп, оҙон ҡуңыслы хром итеген шығырлата баҫып тамбурға сығып китте. Күренеүенсә, үҙенә урын да, толҡа ла таба алмай: нисек инде Заһретдин ише Заһретдинды тоттолар ҙа, бронен һыпыра тартып алып, армияға оҙаттылар. Армияға алыныу тураһындағы уй уның башына ла килмәгәйне. Ирәндек тауының көнсығыш битендәге Дарыуҙы һыуы буйында, сылтырап аҡҡан көмөштәй таҙа шишмә тауышын тыңлап ҡына ултырып, старателдәрҙән алтын ҡабул итә ине бит ул. Нисә йылдар инде донъя ғәме, тормош хәсрәте уны урап үтте. Бисәһенең кейгәне атлас та ебәк, биҙәкле сатин да либерти ине. Ә үҙ кейеме һуң! Бостон да шевиот, габардин, ашағаны француз булкаһы ла керәндил, эскәне ялтыр ҡалай ҡумталы "стопитый" йәки цейлон сәйе. Ә аяғында табанлыҡ араһына ҡайын туҙы һалып тегелгән, баҫҡан һайын шығырлап торған ялтыр хром итек. Ә тәхил шарабы тураһында һөйләйһе лә юҡ. Тап-таҙа туҡһан алты градуслы зәмзәм һыуы өҫтәл тояғы ҡырында фанера менән ябылған биҙрәлә ултыра - һоҫоп ал да эс! Ҡайһы саҡтарҙа көрөшкәне батырыбыраҡ һемереп ебәрһәң, әсең өҙөлөр, өҫтәл артында ултырып кәйефләнеп тә алаһың:

Ана килә афтамабиль,
Тейәгәне таш күмер...

Нисә йылдар алтын ҡабул итеп эшенең яйына ла төшөнөп бөткәйне. Бына үҙҙәренең машерт* станогында көн буйы һары балсыҡ, алтын ҡомо йыуып арыған, брезент курткалары һарғайып бөткән старателдәр көн ауышыуға төрлөһө төрлө яҡтан алтын ҡабул итеү урынына ағыла - алтын тапшырырға сиратҡа тора. Тояҡтары ергә батырылып, ҡарағай таҡтаны йышып эшләгән өҫтәлдең һул мөйөшөндә ниндәйҙер шыйыҡса һалынған оҙонса ҡалай һауыт бар. Ә Заһретдиндың күкрәгенә тейеп тигәндәй, үлсәгес, старателдәр әйткәненсә, "мыҫҡал" тора. Был мыҫҡал алтын эҙләүселәрҙе һирәк-мирәк байыта ла, йышыраҡ ярлыға ҡалдыра.

Шуға күрә лә улар алтынына ла, "мыҫҡалы"на ла ҡул һелтәп кенә ҡарай. "Алтын табып кем йәлсегәне бар. Алтын нисек килә, шулай китә", - тиҙәр. Шуға күрәлер ҙә, алтын табып, ҡулына әҙерәк мал керһә, старатель, эшен ташлап, байлығы бөткәнсе аяҡ тибеп, кәпәс ташлап байрам итә. Мәгәр донъя юҡлығы, аслыҡ уны яңынан машертына килеп көрәгенә тотонорға мәжбүр итә.

Сират торған старателдәр терегөмөш ярҙамында тотолған ваҡ ҡына бөртөклө алтын валсыҡтарын төргән ҡулъяулыҡтарын сисәләр ҙә, баяғы шыйыҡсалы һауытҡа һалалар. Һаҡ ҡына һалалар ҙа, ике күҙҙе алмай көтә башлайҙар. Ҡалғаны Заһретдиндың эше. Ул йылтыр тимерҙән эшләнгән ҡыҫҡысты уң ҡулына ала ла һалынған алтынды бутарға керешә. Уны балсыҡтан, тупраҡтан, башҡа ҡушымталарҙан, терегөмөштән айырған ваҡытта янып ҡарайған төтөн ҡоромдарынан таҙарта. Үҙенең тәбиғи һары төҫөнә ингән алтын бөртөктәрен мыҫҡал тәрилкәһенә һалып үлсәй ҙә бөтә кеше ишетерлек итеп иғлан ҡыла: "Хәким ағай! Һинең алтының бер мыҫҡал!"* "Зәйнулла ҡоҙа! Һинеке ярты мыҫҡал". Шунан һәр кемдең тапшырған алтынына күрә кәпитәнсә яҙып бирә лә эше тамам. Старателдәр ҡағыҙҙы тотоп контораға - бонға** йүгерә. Ә инде бонға - аҡса ҡағыҙынан эшләнгән ҡөҙрәтле нәмәгә, ҡош һөтөнән ғәйре бөтә йәнеңә кәрәкте һатып алып була.

Старателдәрҙән алтын ҡабул итеп, сейфҡа тапшыра ла, Заһретдиндың хеҙмәте тамам: кеҫәһенән әлеге батист кармайҙы сығарып, йәмшек табалай ҡып-ҡыҙыл битен һөртөп ала, фанера өҫтөндә түңкәреүле ятҡан алюмин көрөшкәгә тотона. Бер ун-ун биш минут үтеүгә, уның кәйефе күтәрелеп, зәңгәр күктә Ирәндек тауы яғына әкрен генә йөҙгән болоттарға барып олғаша ла, тағы:

Ана килә афтамабиль,
Тейәгәндәр таш күмер...

Бына кем ине ул Заһретдин ағағыҙ! Ул үҙ баһаһын бик яҡшы белде. Теләһә кем менән уралманы, килгән-киткән менән ултырҙаш булманы. Алтын тапҡан кешеләрҙән дә һый-хөрмәт ҡабул итмәне. Старателдәр янында шундай, ә инде участка начальнигы, артель башлығы алдында баҫма булып ятырға ла риза. Әллә ҡайһы тарафтарҙан килен булып төшкән ҡатыны Маһитап уны шулай өйрәткән. "Шул ҡатып бөткән ауылдаштарың менән сыбалма! Башыңды һәләк итерҙәр һинең ул ҡырағайҙарың", - тип Заһретдинды көн һайын киҫәтеп кенә тора. Ә Заһретдин ҡатынын бик тә ярата, һүҙенән бер генә ҡарыш та ситкә сыға алмай.

Бына шулай ғүмер һөрҙө ул Заһретдин.

Әллә ҡайҙан һуғыш башланып китте. Мәгәр бының башындағы бер сәсе лә ҡыбырламаны: военком бер аҙна үтеүгә районға саҡырып, ҡулына бронь тотторол ҡайтарҙы. Һуғыш бөткәнсе, май эсендәге бөйөр шикелле, ғәмһеҙ генә донъя көтөп ятырға ине ниәте. Ләкин эш үҙе уйлағанса барып сыҡманы: старателдәрҙең күбеһе кәйлә-көрәктәрен - мылтыҡҡа, һары балсыҡҡа буялған брезент көпөләрен шинелгә алмаштырҙы. Алтын эшләү һүнде, старателдәр артелен яптылар, юҡҡа хисап булғас, ҡабул итеү пунктын да бөтөрҙөләр. Шулайтып, Заһретдиндың хәжәте ҡалманы. Хәрби комиссариат повесткаһы уны ла эҙләп тапты. Районға барғас, ул: "Как же, минең бронем бар бит!" - тип ауыҙ ғына асҡайны, уныһын тартып алдылар ҙа ҡулына икенсе документ тотторҙолар. Сургучлы мисәт баҫылған конверт тышына: "Командиру воинской части V... при Н... кавалерийском училище", - тип яҙылғайны. Хәрби комиссариатта: "Минең менән тағы кемдәр бара? Ул ниндәй часть һуң ул?" - тип һорашырға ла самалағайны, ҡулына документ тотторған лейтенант Заһретдиндың бер унда, бер бында һуғылып, ни эшләргә белмәй йөрөгәнен күреп: "Иптәш Итәлмасов! Документығыҙ ҡулығыҙҙа, бөгөнгө киске поезга өлгөрөгөҙ! Шагом марш!" - тип екерҙе. Хәрби комиссариат менән тамам хушлашып, тышта көтөп ултырған ҡатыны янына сыҡты. Иренең һөмһөрө ҡойолоп килеүенән Маһитап эштең хөрт икәнлеген төшөнөп алды.

- Нишләй, нимә тинеләр? ҠалдырҙыларМы?

- Эйе, ҡалдырҙылар! Көтөп тор! Ҡана, дилбегәне бир! Хәҙер стансаға, киске поезға барып етергә кәрәк, - тип Заһретдин атын Ҡаръятмаҫ тауы яғына борҙо.

Ҡаръятмаҫты күтәрелеп, юл һарҡыуға табан киткәс, Заһретдин галифе кеҫәһенән теге конвертты сығарып, яңынан яҙыуын уҡыны ла: "Бер үҙемә конверт биргәс, бигүк юҡ часть түгелдер әле. Йә шул командирҙарына урынбаҫар-фәлән кәрәктер, унда ла беҙҙең һымаҡ эш мәнеһен, донъяның рәт-сиратын белгән кешеләр кәрәкмәй тиһеңме ни?" - тип уйланы ла бер аҙ кәйефе күтәрелеп, күңеле тынысланa төштө.

Тик, инәһеҙ, мынауы "кавалерия" тигән һүҙе генә эсте бошора бит әле. Заһретдин күҙен йомоп уйға сумды. Ауылда тыуып үҫеүенә ҡарамаҫтан, малайҙар шикелле, атҡа әүәҫлеге булманы. Биш-алты йәштә ат һуғарырға тип барғанда яй ғына юртып киткән бейәнән йығылып ҡалды ла бүтәнсә ат менеү түгел, эргәһенә бармаҫ булды. Хатта һуғарырға ла теҙгененән етәкләп кенә алып бара. Бына ошо кешене кавалерияға яҙғандар!..

- Ҡайтҡас, ауылдаштар һорашһа-нитһә, теләһә ни һөйләп йөрөмә. Уға ғына ҙур конверт тоттороп, үҙен генә махсус часҡа оҙаттылар, тиерһең, - тине мыштайып килгән ҡатынына.

Кем белә, хата булған тип, кире ҡайтарып ебәрерҙәр әле. Улай тигәс тә, "Главзолото" начальнигы Серебровский үҙе ҡул бирешеп күрешә торғайны бит...

## II

Вагон тәгәрмәстәренең шаҡылдауын тыңлап, икеһе ике төрлө уйға сумған ауылдаштар оҙаҡ ҡына өндәшмәй барҙы. Заһретдин бик ғәмһеҙ күренгән юлдашына тағы бер ҡарап алды ла йәлпәк битенә етдилек йүгертеп, бер нисә тапҡыр тамағын ҡырҙы. Шунан тауышын ҡалынайтыбыраҡ Ғилмишәрифкә өндәште:

- Самаңа ҡарағанда, земляк, һин дә шул әрмиәгә китеп бараһыңдыр инде? Юлың уң булһын! - тигән булды.

- Эйе. Былай колхоз хужаларының мине алып ҡалырға ниәттәре лә юҡ түгел ине, ләкин ҡырталашып китеп барған көн. Мынауындай хәтәр заманда ниндәй йөрәк менән сыҙап ятмаҡ кәрәк? Ил күргәнде күрмәй әмәл юҡ.

Мәте Заһрый юлдашына аптырабыраҡ ҡарап ултырҙы ла: "Ҡара, ҡара, ниндәйерәк хәбәр һөйләгән була: йәнәһе лә, уны колхоз алып ҡалырға тырышҡан, һинең хәжәтең дә колхозыңа шул үҙең саҡлы ғына инде!" - тип уйлап ҡуйҙы.

Станция һайын уларҙы ҡыҫырыҡлап вагонға килеп тулған кешеләр башланған әңгәмәне йыш ҡына өҙөргә мәжбүр итте. Елкәләренә тоҡ аҫҡан, ҡулдарына ҡайһыһы фанер сумаҙан, ҡайһыһы ҡумтаға оҡшаған һандыҡтың йоҙағынан тотоп инеп-сығып тороусылар бер-береһен этә-төртә шаулашып ҡыҫыҡ вагонда урын дауланы. Ә былар баштан инеп алған урындарында, йомортҡа баҫҡан тауыҡ шикелле, ултыра бирҙе. Шулай ҙа Ҡарталы станцияһына етеп, көньяҡҡа - Ташкент, Ырымбур, Ҡустанай яғына барыусылар шау-гөр килеп вагондан төшөп ҡалғас, Силәбегә китеүселәрҙең һаны байтаҡҡа кәмене. Заһретдин Ҡарталыла төшөп, әҙерәк перронда йөрөп инде лә тағы ауылдашының ҡаршыһына ултырҙы.

- Ҡайҙәле, ауылдаш! Документтарыңды күрһәт! Ҡайҙа сәфәр тотаһың икән? Ҡарайыҡ әле, - тине.

Әммә Ғилмишәриф, ауылдашы уйлағанса, бигүк бер ҡатлы булып сыҡманы:

- Нимәгә кәрәк ул һиңә? Урын-еренә барып еткәс, кәрәкле кешеһенә күрһәтермен, - тине.

Ғилмишәрифтең яуабы Заһретдинды аптырауға ҡалдырҙы.

- Мин ни... былай ғына... ауылдаш тип ҡайҙа барыуыңды белергә тип ҡыҙыҡһынғайным, - тигән булды. Бер аҙҙан Заһретдин аяғүрә баҫты ла галифе кеҫәһенән хәрби комиссариат биреп ебәргән пакетты сығарҙы, бөтә кеше ишетерлек итеп конверт тышына яҙған адресты уҡып ишеттерҙе.

- Бына шулай, Ғилмишәриф ҡусты, бер үҙемә бер пакет тотоп, ҙур командир ҡарамағына китеп барам. Райондың военкомы Белоногов кабинетында үҙ ҡулы менән тапшырҙы. "Бына иптәш Итәлмасов! Ошондай яуаплы вазифаны йөкмәтеү өсөн, районда эҙләп-эҙләп ҡараныҡ та, һинән дә ҡулайыраҡ кеше табалманыҡ. Тапшырылған бурысты урын-еренә еткереп үтәрһең, тип ныҡ ышанабыҙ", тип ҡулды ҡыҫты. Яуаплы етәкселәр бөтә урында ла: әрмиәлә лә, тылда ла кәрәк ул", - тип Заһретдин һүҙен осланы.

Ғилмишәриф бер ни өндәшмәһә лә, ауылдашы менән үҙенең бер часҡа китеп барыуын белде. Шулай ҙа, был бер ҙур урынға тәғәйенләнгән икән, тип фекер йөрөттө.

---

*Башгерд - немецса. Урындағыса машерт - алтын ҡомон йыуа торған иләкле станок. Ғәҙәттә, ауыр тоҡомо өҫтә, еңеле аҫҡа төшә.

*Мыҫҡал - золотник. Элекке ауырлыҡ үлсәүе - 4,35 г самаһы.

**Бон - старателдәр менән хисаплашыу өсөн сығарылған ҡиммәтле ҡағыҙ.

***✓ Бер төйөнсөктән көлдә бешкән өшә һындырып ашай башланы. Ғилмишәриф бер-ике уртлап һыу эсте лә икенсе моҡсайынан сығарып һыулы көрөшкәһенә талҡан һала башланы. Шуны иҙеп, бутҡа һымаҡ нәмә яһаны.***



Бер аҙ бара биргәс, Заһретдин түбәнге кәштәгә басты ла өҫтә ятҡан сумаҙанын төшөрөргә уйланы. Таш тултырғандай ауыр сумаҙанын тартҡыслап ҡараны ла Ғилмишәрифкә:

- Ҡусты! Ҡана, әҙерәк ярҙам итсе әле, ошо сумаҙан булған нәмәне аҫҡа төшөрәйек, - тине. Ғилмишәриф бер аяғына ғына баҫты ла икенсе ҡулы менән елтерәтеп сумаҙанды аҫҡы кәштәгә, ауылдашы алдына ҡуйҙы. Заһретдин, һөйләнә-һөйләнә, сумаҙан ҡайыштарын сисергә тотондо.

- Юлда килә торғас, ҡорһаҡ та асҡан әле. Әҙерәк әүҡәтләнеп алырға кәрәк, - тигәнен генә аңланы ауылдашы.

Заһретдин ҡағыҙға, аҡ сепрәккә төрөлгән аҙыҡты үҙ эргәһенә һалды ла сумаҙанының өҫкө ҡапҡасынан өҫтәл яһап, бәләкәй генә сигелгән ашъяулыҡ йәйҙе. Сумаҙаны төбөнән мөгәҙ һаплы ялтыр бәке сығарып, ҡаҡлаған колбаса, йылҡы ҡаҙыһы тураны, сепрәгәнә майы һеңгән ҡаҡлаған ҡаҙ сығарып, бер ботон айырып һалды. Алтын лавкаларында ғына һатыла торған француз булкаһын киҫәк-киҫәк итеп телде лә берберәһе өҫтөнә өйҙө. Шунан ыҡсым ғына тоҡсайҙан сабый бала дәүмәллеге бөкөлә быяла һауыт сығарҙы, тоҡҡаһына йылтыр тимер сыныйр бәйләнгән алюмин көрөшкәнә спирт һалды. Был шулай бара, ә тоҡтары, сумаҙандары өҫтөнә ултырған кешеләр вагон эсен солғап алған тәмле-томло аҙыҡ, спирт еҫенә мырш-мырш итеп танауҙарын тартып ала. Заһретдин ҡүкрәген тултырып эскә тын алды ла, ҡүҙен йомоп, алюмин көрөшкәне бушатып ҡуйҙы. Шунан оҙаҡ ҡына "һә... һә!.." тип ситҡә тын бөрккәс, ҙур ләззәт менән ашарға керешә.

Бер аҙ ашап алғас, Заһретдин сумаҙан өҫтөндә ултырған көрөшкәне ҡулына алып төбөнә текләп ултырҙы ла кире урынына ҡуйҙы. Кирелә бирeп бөтә вагонға ишетелерлек итеп кикерҙе, ашъяулығын йыйып, сумаҙанына кире тыҡты.

- Ғилмишәриф ҡусты...

Поезд йөрөшөнә ҡаршы йүгергән далаҙы, унда-бында үҫкән сауҡалыҡтарҙы ҡарап барған Ғилмишәриф үҙ исемен ишетеп һиҫкәнеп ҡуйҙы - Заһретдин өндәшә икән.

- Ғилмишәриф ҡусты! Мынауы сумаҙанды кире урынына ҡуйсы әле!

Ни хәл итһен, йәш кеше ауыр сумаҙанды өҫкө кәштәгә ырғытты ла кире урынына ултырҙы. Бер аҙ барғас, үҙе лә тамаҡ ялғарға булды. Мөйөштә ятҡан ауыҙы бәйле моҡсайынан ҡалай көрөшкә сығарып, титандан ҡайнар һыу килтерҙе. Бер төйөнсөктән көлдә бешкән өшә һындырып ашай башланы. Уның икмәген таҙа тештәре менән сытырлатып сәйнәүенән Заһретдин сөсө икмәгенә киндер орлоғо ҡушып бешерелгәнен аңланы. Ул нишләптер Ғилмишәрифтән күҙен алмай әҙләкһеҙ теклән ултырҙы, бер нисә тапҡыр уға ниҙер әйтергә теләгән шикелле әйелеп тә ҡуйҙы, ләкин өндәшмәне. Ғилмишәриф бер-ике уртлап һыу эсте лә икенсе моҡсайынан сығарып һыулы көрөшкәһенә талҡан һала башланы. Шуны иҙеп, бутҡа һымаҡ нәмә яһаны.

Заһретдин ерәнгән кеүек ҡарап алды ла тамбурға сығып китте. Йәнәһе лә, бергә барһалар ҙа, икеһе ике кеше. Шулайтып, урынға килеп еткәнсе, быларҙың береһе вагонда рәхәтләнеп тәмле-татлы ашап, ә икенсеһе ҡайнаған һыуға талҡан болғап туҡланып килде.

### III

Уларҙың хеҙмәт итәһе часы Н. ҡалаһының көнсығышында урман араһындағы землянкаларҙа урынлашҡан булып сыҡты. Штабтың строевой бүлегендә документтарын тапшырыр алдынан оло сумаҙанын һөйрәп арманһыҙ булған Заһретдин, ер аҫтына төшөп киткән ҡараңғы коридорға килеп ингәс, Ғилмишәрифтең еңенән тартты ла:

- Земляк, сабыр ит әле! Документты мин алдан бирәйем, - тине.

- Әйҙә, әйҙә! Тапшыра күр.

Заһретдиндың үҙ уйы бар: штабта тегенең документын алдан ҡарап, минә тәғәйен урынға яңылыш уны ебәреп ҡуймаһындар. Шунан "Строевая часть" тип яҙылған ишеккә башын тыҡты:

- Разрешти! - тип ҡысҡырҙы. Өҫтәл артында ниҙер яҙып ултырған өлкән сержант быларға әйләнде лә, был ике кешене баянан бирле көтөп ултырғандай:

- Ваши документы! - тине.

Заһретдин документын беренсе булып һондо. Сержант конвертты шатыр-шотор һүтте лә, эсендәге ҡағыҙға күҙ йүгертеп, иғтибарһыҙ ғына ситкә этеп ҡуйҙы. Уның шулай бик һаҡһыҙ ҡыланыуы Заһретдиндың эсен бошорҙо. Заһретдин бит өлкән сержант торған барьерҙың бәләкәй ишеген асып сығыр ҙа ҡосаҡтарын йәйеп: "Уй, иптәш Итәлмасов, килеп еттеңме инде! Беҙ һине командир менән күптән көтә инек!" - тип өтәләнергә тотоноp тип уйлағайны. Өлкән сержант Ғилмишәрифтең дә документын әлеге ҡағыҙ өҫтөнә ырғытты, шунан телефондан кемделер саҡырҙы. Күп тә үтмәй, киң яңаҡлы, ҡыҫыҡ күҙле, ҡамыт аяҡлы старшина, шпорҙарын сылтыратып, быларҙы үҙе артынан әйәртеп алып китте. Ғилмишәриф: "Минең земляк артта ҡалды бит, көтөп алайыҡ", - тип эргәһендә барған старшинаға ишара яһаны. Ә тегеһе артына әйләнеп ҡараны ла:

- Давай, давай, повеселее! - тип ҡысҡырҙы.

Заһретдин, сумаҙанын хром итегенең ҡуңысына һуға-һуға килеп етте лә, аһылдап, сумаҙаны өҫтөнә ултырҙы.

- А ну встать! Вишь расселся, как князь! - Старшина ҡысҡырып ебәрҙе. - Һин нимә? Сумаҙаныңа таш тейәп килә ятаһыңмы әллә?

Ауылдаштар эсе үҙҙәре кеүек кешеләр менән шығырым тулған ҡараңғы землянкаға барып инде. Старшина ике ҡатлы ҡаҡ һәндерәнең бер мөйөшөнән урын күрһәтте лә ҡайҙалыр китеп юғалды.

Бер аҙҙан:

- Бөгөн бер ниндәй ҙә йылы аш көтмәгеҙ! Ни алып килгәнһегеҙ, шуның менән туҡланып ятығыҙ! - тигән команда булды.

Һәр кем үҙ йүнен үҙе күреп ятырға әҙерләнде. Заһретдиндың тамағына аш бармаҙы. Бер аҙ ултырғас, ул спирт һалып эсеп, тамағына ҡапҡылап та ҡараны, ләкин күңеле үҫмәне, күңелен ҡара һөрөм, ауыр болот баҫты.

Иртәнге сәғәт алтыла "подъем!" иғлан ителәр. Силғау, аяҡ, тир еҫе аңҡыған бөркөү коридорҙа һуҡыр шәм яҡтыһында аяҡ тыпырлауы, бер-береһе менән төртөшөп һүгенеү тауыштары ишетелде. Иҙән уртаһында баҫып сәғәтенә ҡарап торған старшина:

- Живее, живее! Быстрее в строй! - тип ашыҡтырҙы.

Кейенеп бөткәндәре стройға йүгерҙе. Иң аҙаҡтан булһа ла, Заһретдин да барып баҫты. Кешеләр урындарын алып тынысланғас, старшина саф алдына сығып баҫты ла, шпорҙарын зыңлатҡанса үксәһен үксәгә һуғып:

- Иптәштәр! Һеҙ Ҡыҙыл Армия, уның данлыҡлы кавалерияны өсөн менге аттарҙы өйрәтә торған училище янындағы ремонт часына хеҙмәткә саҡырылғанһығыҙ, - тип белдерҙе.

- Вот это да!

- Вот это здорово! Мин ат тигән хайуанды ғүмеремдә күргәнем дә юҡ! - тигән тауыштар ишетелеп ҡалды. Былай ҙа эсе бошоп саҡ торған Заһретдиндың йөне алҡымына килде. Ул ат өйрәтеү түгел, атҡа атланғаның да хәтерләмәй.

- Бына ошо часҡа килгән аттарҙы менгегә, тәүге кавалерия алымдарына өйрәтәбеҙ ҙә, уларҙы Ҡыҙыл Армияға тапшырабыҙ. Эскадрон писары һеҙҙең исемегеҙҙе алып бөткәс, иртәнге ашҡа барабыҙ. Ә унан һеҙҙе мунса төшөрөп, обмундирование таратып бирәбеҙ. Аңлашыламы? Һорауҙар бармы?

- Атта йөрөй белмәгән кешеләрҙе нишләтәһегеҙ? Пример, бына мин үгеҙҙән башҡа хайуан менән эш иткәнем юҡ! - тип ҡысҡырҙы берәү.

- Башта үҙегеҙҙе өйрәтәбеҙ. Ә шунан инде һеҙ үҙегеҙгә беркетелгән аттарҙы өйрәтергә тотонаһығыҙ. Ясно?

- Ясно!

**(Дауамы бар).**

ХӘТЕРЛӘП...

# ЫШАНМАҒЫҘ БЕҘГӘ, АУЫЛДАР...

**(Башы 9-сы биттә).**

"Киске Өфө"нөң һәр һанында тиерлек ауыл темаһы күтәрелеп тора. Матбуғат хеҙмәткәрҙәре, башҡа авторҙар - бар булмышына ауыл рухы һеңгән, ауылдың тын алышын тойған кешеләр булғанғамылыр, ошо мәсьәләгә айырыуса ныҡ иғтибар бүлә, шуныһы һөйөнөслө. Бер нисә йыл элек, Бөрйән районында йәшәүсе Фәнүзә Ишбаеваның бер мәҡәләһе сыҡҡайны. "Аңыбыҙ асылһын ине" тип аталған ошо бәләкәй генә мәҡәләлә ул башҡорт еренең иҫ киткес ҙур тәбиғәт байлығы хаҡында, ана шул гүзәллектең ҡосағында ауылда йәшәүселәрҙең ни тиклем бәхетле булыуы тураһында яҙғайны. Шул уҡ ваҡытта, ҡаланың таш диуарлы йорттарында ғүмер иткән, пандемия сәбәпле өйҙәренән сыға алмай бикләнеп ултырған яҡташтарыбыҙҙы ла йәлләгән. Ошо ҡатмарлы осорҙа һәр төрлө ауырлыҡтарға баш эймәй, "тау артындағы хыял-маҡсаттарҙы ауыҙлыҡлап", ситтәге зиннәткә ҡыҙыҡмай, ҡулыбыҙҙа булған ана шул байлыҡтың ҡәҙерен белеп, файҙаланып, "атты арытмаҫ, тунды туҙҙырмаҫ", хәлебеҙҙән генә килерҙәй ғәмәлдәр атҡарып йәшәргә саҡырған ине был аҡыллы гүзәл зат. Бәләкәй генә ошо яҙмаһында халҡыбыҙың тел байлығын бик уңайлы итеп сағылдырған ағинәйебеҙ, гүйә, үҙе бер "башҡорт теле энциклопедияһы"! Әллә күпме мәҡәл-әйтемдәрен, туған телебеҙгә генә хас булған, әммә лөғәтебеҙҙән төшөп ҡала барған шундай матур һүҙбәйләнештәр килтергән. Күптәрен тәүге тапҡыр ишеттем. Уларҙың һәр береһен һөйләмдең тейешле урынына йәтеш кенә итеп ҡуя белеү ҙә кәрәк бит әле! Бына тағы ниндәй хазиналар бар икән ауылдарыбыҙҙа!

Гәзитебеҙҙең быйылғы 15-се һанында Ләйсән Вәлиеваның республикабыҙҙың билдәле шәхесе Рәис Низаметдинов менән ҡоролған "Мунсаһыҙ баҡса... ерһеҙ башҡорт булмай!" тип аталған әңгәмәһе баҫылып сыҡты. Уҡыусыға ҡала кешеһе тип иҫәпләнһә лә, бик күп милләттәшебеҙҙең ауыл еренә тартылыуы хаҡындағы фекер еткерелгән унда.

Ауыл кешеһе тураһында үҙенең уй-хистәрең менән әленен-әле бүлешеп алғы килә. Баштараҡ әйткәндәй, күптәребеҙ ҡала еренә бик тәрән тамыр ебәреп өлгөргәнбеҙ шул. Әлбиттә, беребеҙҙе лә ғәйепләрлек урын юҡ. Тормош бит. Ниндәйҙер аныҡ функция үтәп йәшәгән күп кенә милләттәшебеҙ, ысынлап та, бында - ҡала ерендә кәрәгерәктер ҙә, сөнки күптәренең һөнәре, шөғөлө фәҡәт ҡала ерендә генә яраҡлы. Әлеге көндә ҡалаларҙа ғүмер иткән бихисап күренекле шәхестәребеҙ ҙә республикабыҙҙың төрлө район ауылдарында тыуып үҫкән. Әллә ҡасан уҡ ауыл мөхитенән айырылыуына ҡарамаҫтан, күп кенә зыялыларыбыҙҙың, шул иҫәптән, яҙыусыларыбыҙҙың ауылдарҙы һағыныуы, милләтебеҙҙең гөрөф-ғәҙәтен, телен һаҡлап алып ҡалыу өсөн борсолоуы - маҡтаулы. Әммә, ауылыбыҙ, милләттебеҙ, телебеҙ хаҡында күпме генә уйланып, матур-матур шиғыр һәм проза әҫәрҙәре ижад итһәк тә, Әнғәм Атнабай әйтмешләй, бар булмышыбыҙға "ҡала сире" һеңгән кешеләр беҙ.

Бәғзе ваҡыт, хистәргә бирелеп, ошо юҫыҡтараҡ һүҙ сығара ла башлаһаң, ҡайһы берәүҙәр еңел генә итеп: "Бәй, ауылға күсеп ҡайт һун!.." тип кәнәш итә. Әммә әйтеүе генә анһат. Йәш саҡта ҡала еренә килеп тамыр йәйеп, балаларың да ошонда тыуып үҫеп, ҡала мөхитендә нығынып алғас, ҡаланың "таш диуарлы йорттарында" ғүмер ахырыһына ҡәҙәр йәшәмәй ҡайҙа бараһың инде. Ҡапыл да айырылып китеп тә булмай шул. Күптәр ваҡыты еткәс, үҙен тыуған ауылына алып ҡайтып ерләүҙәрен үтенеп... васыят ҡына әйтеп ҡалдыра.

Әйткәндәй, "Ауылға яңынан ҡайтып булмайҙыр", тигән бер аҙ пессимистик ҡараш, бәлки, минең һымаҡ оло йәштәге кешеләргә генә хастыр. Бөгөн ауылдарҙың бөтөүгә юл ҡуймаҫтай эшлекле йәштәребеҙҙең дә байтаҡ булыуы хаҡында хәбәрҙармын, шуныһы һөйөнөслө. Тейешле шарттар булдырғанда көстәре ташып торған йәштәребеҙ ауылдарға ҡайтып, ысынлап та, ҙур ғына эштәр атҡара алыуы бик мөмкин. Ишетеүемсә, ауыл ерендә уртаса ғына түгел, ә ысын мәғәнәһендә бай булып йәшәгәндәр хаҡында әллә күпме миҫалдар бар. Донъя малы менән булышып, шул уҡ ваҡытта башҡа рухи ҡиммәттәрҙе, боронғо ата-бабаларыбыҙҙың һәр төрлө гүзәл йолаларын онотмай, телен, мәҙәниәтен, динен һаҡларлыҡ балалар тәрбиәләп, ғүмер итеп килгән йәш кешеләребеҙ булыуы хаҡында ла гәзитебеҙҙә мәғлүмәттәр күреп шатланам. Гөмүмән, йәштәребеҙгә оло ышаныс бағларға була, тимәксемен. Әлбиттә, ҡалалағы милләттәштәребеҙ араһында ла үҙ балаларын башҡорт рухында тәрбиәләп, тап-таҙа башҡорт телендә уҡый-яҙырға өйрәтә алыу бәхетенә ирешкәндәр бар ул, әммә ундайҙар ифрат аҙ шул.

Һүҙ аҙағында. Шулай ҙа бик тә һағынып китһәм, ҡайһы берҙә тыуған ауылыма ҡайтып, бала сағымда йүгереп уйнап үҫкән урамдарым буйлап үткеләйем мин. Бөгөнгө ауыл, һис һүҙһеҙ, бөтөнләйгә элекке һымаҡ түгел. Тимер ҡоймалы, ҡалай ҡыйыҡлы, эре-эре матур йорттар күбәйгән хәҙер ауылда. Байтаҡтарының ихатаһында трактор (уға тағыла торған арба, һәнәк, һоҫҡо, һөргөс), ялан кәртәләрендә эре-эре бесән эҫкерттәре лә күренгеләй. Шуларға ҡарап, ауылында тырышып, яҡшы йәшәп ятҡандарҙың булыуына һөйөнәһең. Тик, ни өсөндөр, ауыл урамдары буп-буш, шуныһы күңелде өйкәй. "Фәлән ауылдаш иҫәнме әле, хәҙер ҡайҙа йәшәй?" тигән һорау бирер өсөн дә бер кемде тапмаҫһың. Ауылымдың бер осонан икенсеһенә тиклем үтеп тә, ҡайсаҡ берәүҙе лә (хатта тышта уйнап йөрөгән бала-сағаны ла!) осрата алмаған мәлем булманы түгел! Әммә төшөнкөлөккә бирелмәйем: "Мин генә, эшһеҙ пенсионер булараҡ, урам ҡыҙырып йөрөйөм, ахырыһы, ә ауылдаштарымдың һәр кемеһе ысын эш менән мәшғүлдер", - тип, үҙемде тынысландырырға тырышам...

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

***✓ Башҡорт ҡатын-ҡыҙының асылы ул - иман, һәр милләттең бер үҙенсәлеге, көнитмеше, йәшәйеше булып формалашҡан кәсептәре, ашһыуы, тәрбиә мәктәбе, кейем-һалымы, биҙәүестәре.***



ИНТЕРНЕТТАН



# БАЛА ҺИМЕҘ БУЛМАҺЫН

■ Әгәр ҙә баланы бер үк ваҡытта йоҡларға һалһаң, уның тән ауырлығын нормала тоторға мөмкин. Бындай режимлы үҫмерҙәрҙә һимереү йыш осрамай. Сәбәбе ябай: көн тәртибе шылып йөрөү һөҙөмтәһендә йоҡо туймау һимереүгә килтерә. Пенсильвания университеты хеҙмәткәрҙәре әйтеүенсә, бала сәләмәт булһын өсөн уның йәшәү режимы булырға тейеш. Тикшеренеүҙәрҙә 5 йәшкә тиклемге 2 меңдән ашыу бала ҡатнашҡан. Уларҙы ҡайһы ваҡытта йоҡларға ятыуҙарына ҡарап төркөмдәргә бүлгәндәр. Һынауҙар 10 йыл буйына барған. Асыҡланыуынса, һәр өсөнсө бала ғына үҙ йәшенә тап килгән режим менән йәшәгән. Әгәр ҙә режим булмаһа, бала аҙыраҡ йоҡлаған һәм 15 йәшкә еткәс, унда һимереү күҙәтелгән. Педиатрҙар иҫкәртә: 5 йәшлек бала 18:45 һәм 20:15 ваҡыт арауығында йоҡларға ятырға тейеш. 12 йәшлек балаларға, мәҫәлән, 20:15-21:45 сәғәттә йоҡлау яҡшыраҡ.

■ Ошо уҡ университет белгестәре балаларҙың иртәнге ашында аҡһым мотлаҡ булырға тейеш, тип белдерә. Иртән углевод ашаһаң, тиҙерәк асығаһың һәм төшкө ашта күберәк ашайһың. Шуға ла иртән печенье ҡушып сәй эсеү гәзәтен ҡуйырға кәрәк. Тикшеренеүҙәрҙә 8-10 йәшлек балалар ҡатнашҡан. Иртән аҡһымдан торған ризыҡҡа өҫтөнлөк биреүселәр углевод ашаусыларға ҡарағанда төш мәлендә яҡынса 4 процентҡа аҙыраҡ ашаған. Артыҡ ауырлыҡ менән яфаланыусылар өсөн 4 процент бәләкәй һан түгел, ти белгестәр һәм баланың иртәнге ашына күберәк иғтибар бирергә саҡыра.

■ Раш университеты ғалимдары яңы диета уйлап тапҡан. MIND диетаһы тип аталған был диета когнитив тайпылыштарҙы (хәтер, аҡыл кеүәһенең һәм башҡа когнитив функцияларҙың түбәнәйеүе) булдырмаҫҡа ярҙам итә. 4,7 йыл дауам иткән һынауҙарҙа 960 өлкән йәштәге кеше ҡатнашҡан. MIND диетаһын тотҡандарҙың баш мейеһе 7,5 йәшкә йәшерәк булып сыҡҡан. Йәғни, улар был тайпылыштар менән башҡаса туҡланыусыларға ҡарағанда һуңғараҡ осрашҡан. Диета 15 компонентты үҙ эсенә ала. 10 төркөм аҙыҡ-түлек - мейе өсөн файҙалы, ә 5 төрлө ризыҡтан - ҡыҙыл иттән, майлы аҙыҡтарҙан, фастфудтан, майҙан һәм маргариндан, тәм-томдан баш тартырға кәрәк. Ғалимдар билдәләүенсә, сәләмәт булырға теләгән кеше көн һайын 3 порция ярма, йәшел япраҡлы йәшелсәләр ашарға тейеш. Ҡапҡылап алыу өсөн сәтләүектәр ҡулланылһын. Борсаҡ кеүек ҡуҙаҡлыларҙы көн аша ашарға кәрәк. Шулай уҡ аҙнаһына ике тапҡыр ҡош ите, еләктәр, балыҡты аҙнаһына бер тапҡыр булһа ла әҙерләү мөһим. Бынан тыш, көнөнә 1 балғалаҡ аҡ май рөхсәт ителә. Сырға килгәндә, ул көнөнә 1 порциянан артыҡ булырға тейеш түгел.

■ Һимеҙлек кешенең дөйөм торошона ғына түгел, ә психик сәләмәтлегенә лә йоғонто яһап, йыш ҡына депрессияға алып килә, бындай кешеләр эштә лә тиҙерәк арый. Физик әүҙемлек өсөн ваҡыт табыусылар бындай проблемаларға осрамай, мәҫәлән, аҙнаһына 4 тапҡыр спорт менән шөғөлләнеүселәр депрессияның нимә икәнен дә белмәй. Ғалимдар физик көсөргәнештең психикаға ыңғай тәьҫир итеүен күптән дәлилләгән. Табиптар әйтеүенсә, физик күнекмәләр организмда митохондрийҙарҙың күләмен арттыра. Митохондрийҙар энергия бүлеп сығыу өсөн яуаплы булғанлыҡтан, спорт менән шөғөлләнгәндән һуң көс һәм ихтыяр көсө арта. Көньяҡ Каролина университеты ғалимдары фаразлауынса, был матдәләр баш мейеһендә лә әүҙемләшә. Һөҙөмтәлә, хәтер яҡшыра, депрессия, күңел төшөнкөлөгө юҡҡа сыға.

АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ

# ХӘТЕРЕБЕҘГӘ...

## заман балтаһы яҫҡынмаһын

**Тотош халыҡты, милләтте, айырым кешене юҡ итәм тиһәң, иң тәүҙә уның Хәтеренә балта сабыу кәрәк, тигән Хәҡиҡәт Сәйәсәт ғәле йәнәптәре тарафынан һәр заманда, һәр тарафта иң шәп ҡорал булараҡ файҙаланылған. Беҙ быны тарихтан да, хәҙерге ваҡиғаларҙан да яҡшы беләбеҙ булыр.**

Ҡытайҙарҙамы, кемдәрҙәлер, дошманына яманлыҡ теләгәндә әйтелә торған "Үҙгәртеп ҡороуҙар заманында йәшә!" тигән ҡарғыш-теләк бар. Аллаға шөкөр, беҙҙең быуынға ла үҙгәртеп ҡороуҙар заманында йәшәү насип булды, ләкин беҙ уны ҡарғыш тип түгел, ә яҙмыш бүләге тип ҡабул иттек: хәтерҙән юйыла яҙған бик күп тарихи ваҡиғаларға ишек асылды, бөйөк шәхестәребеҙҙең исемдәре тергеҙелде. Был беҙҙең халыҡтың шулай уҡ юйыла барған милли рухын, үҙенең кемлеген, ниндәй халыҡтың, ниндәй ырыуҙың балаһы булыуын белергә ынтылышын уятты. Эйе, тарихи Хәтер уянды һәм ул беҙҙе милләт булараҡ та тиңдәр араһында тиң булып, үҙ урыныбыҙҙы алырға мөмкинлек бирер, ин шаа Аллаһ.

Эйе, заман балтаһы менән яҫҡыныуҙан имгәнгән, юҡҡа сыға яҙған шул уҡ Хәтерҙе тергеҙеүҙән башлағайны эшмәкәрлеген бынан ун йыл элек "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзалары ла. Тарихи Хәтерҙең бер бик мөһим өлөшө - башҡорт ҡатын-ҡыҙының асылын юллауға ҡайтып ҡалды улар фиҙаҡәрлеге. Ул асыл нимә? Ул - иман. Ул - һәр милләттең бер үҙенсәлеге, көнитмеше, йәшәйеше булып формалашҡан кәсептәре, ашһыуы, тәрбиә мәктәбе, кейем-һалымы, биҙәүестәре. Шулай итеп, заман үҙгәрештәренә әсенеп-һыҙланып, сараһыҙлыҡтан ҡул ҡаушыра яҙған зыялы, белемле, вайымлы ҡатын-ҡыҙҙар ошо Хәтерҙә генә ҡала яҙған, асылыбыҙға бәйле бик күп хазиналарыбыҙҙы тергеҙеүгә ең һыҙғанды. Юғарынан төшөрөлгән фарман буйынса түгел, ә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты эргәһендәге мин етәкләгән Ҡатын-ҡыҙҙар комиссияһының "Донъябыҙҙы ҡотҡарайыҡ!" тигән әйҙәү-оранына ҡушылып ойошто, берләште улар "Ағинәй" тип аталған ойошмаға. Ә ойошмаға был атаманы биреү дөрөҫ булғандыр, тим, сөнки башҡорт ҡатын-ҡыҙының асылы - ул иң тәүҙә ағинәйлек сифаттарына эйә булыу, йәмғиәттә матур өлгө булараҡ урын алыу бит.

Эйе, "Ағинәй" ойошмаһы ағзалары үҙ иңдәренә бик ҙур яуаплылыҡ йөкмәне: башҡорт йәмғиәтендә милли кейемдәребеҙгә һәм биҙәүестәребеҙгә, кәсептәребеҙгә ҡыҙыҡһыныу тап уларҙан башланды, тип ныҡлы әйтә алабыҙ хәҙер. "Әйҙәгеҙ, беҙҙең ағинәйҙәрҙең төп кейеме - милли кейем һәм биҙәүестәребеҙ булһын", - тигән тәҡдимде күтәреп алып, ойошма ағзалары мәктәптәрҙәге, ауыл музейҙарындағы, тарихи сығанаҡтарҙағы өлгөләргә ҡарап, милли кейемдәребеҙҙең ырыуҙарға хас булғандарын да тергеҙә башланы. Бөгөн был өлгөләрҙе бөтә байрамдарҙа ла майҙандарға, күргәҙмәләргә алып сыға улар.

Был хаҡта бик күп һөйләргә була, тик әлеге бәйән был турала түгел. Милли кейем һәм биҙәүестәр - улар йөҙәр йыл элекке боронғола ҡалған хазиналарыбыҙ тураһындағы Хәтерҙе ҡайтарыу булды.

**Әммә аптырарлыҡ хәлдәр ҙә бар: "Ағинәй" ойошмаһы ағзалары үткәргән йола күренештәренән, сараларҙан күренеүенсә, утыҙ йыллап элек кенә халҡыбыҙ көнитмешендә йәшәгән ҡайһы бер ҡиммәттәр ҙә Хәтерҙә яңыртыуға мохтаж имеш!**

**Шундай хазиналарҙың береһе, ғаиләләрҙә быуындан-быуынға тапшырыла торған төп ҡомартҡы иҫәпләнгәне - самауыр. Улар ҙа бөтөнләй кәрәкмәгән бер әйбер булып, сүп һауыттарына ырғытылды бер заман, йә ҡайҙалыр алыҫҡараҡ йәшереп ҡуйылды, йә музей кәштәләренән урын алды. Хәҙер бына улар йәшерелгән урындарҙан сығарыла, хатта ағинәйҙәр уға арнап байрамдар үткәрә.**

Шул байрамдарҙың береһендә - Көйөргәҙе районы ағинәйҙәренең Яҡут ауылында үткәнендә ҡатнашырға тура килде ошо көндәрҙә. Ике йыл элек "Айыҡ ауыл" конкурсында еңеүсе, егерле халҡы, дәртле ағинәйҙәре, уларҙы бар сараларға, йәмәғәт эштәренә әйҙәүсе, дәртләндереүсе мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре Рәмзиә һәм Рәүеф Әбйәлиловтар йәшәгән ауыл ул. Көйөргәҙе районының ҡото, йөҙөк ҡашы тип тә әйтеп була Яҡутты. Конкурс еңеүсеһенә бирелгән аҡсаға мәҙәниәт йорто эргәһендәге майҙанды спорт ҡорамалдары, хоккей ҡумтаһы менән йыһазландырғандар, туйҙарҙың иң төп тиерлек йолаһы - киленгә һыу юлы башлатыу өсөн "Килен ҡойоһо", шулай уҡ сәхнә лә эшләп ҡуйғандар. Ауылдаштарҙы айыҡ, сәләмәт йәшәү рәүешенә, йолаларына ылыҡтыра торған бөтә байрамдар, саралар ошо майҙанда үтә. Был юлы ла район ағинәйҙәренең самауыр байрамы ошонда ойошторолғайны.

Бәй, Хәтерҙе тергеҙеү менән булғанда самауырлы ғүмер юлы ҡалай яҡты хәтирәләр уята икән дәбаһа! Байрам программаһындағы һәр мәл унда ҡатнашыусыларҙы матур иҫтәлектәргә алып ҡайтты. Самауыр ҡайнатыуҙы онотмағанмы ҡатын-ҡыҙ? Был да бит ғаиләләге айырым бер кешенең генә ҡулынан килә торған оҫталыҡ тип баһалана ине, хәтерләйһегеҙме? Шуға ла байрамда ҡатнашыусылар бер нисә ҡатын-ҡыҙҙың самауырҙарына ут тоҡандырып, уның шыжлап китеүен ҡыҙығып күҙәтте. Артабан төрлө самауыр өлгөләре теҙелгән күргәҙмә, самауырҙа ҡайнаған һыу менән төрлө үлән сәйҙәре әҙерләнеү мәле тамаша ҡылынды. Ошоларҙан һуң Рәм-



Самауыр ҡайната беләләрме?



Яҡут ауылы ағинәйҙәре.

✓ *Беҙ тормошобоҙҙоң һәр йәше үренә бер ниндәй тәжрибәһе булмаған сабыйҙай барып баҫабыҙ.*

*(Франсуа де Ларошфуко).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 30 ИЮЛЬ - ХАЛЫҠ-АРА ДУҪЛЫҠ КӨНӨ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**28-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Көсөк. Балапан. Әсирә. Тараҡ. Балыҡ. Урам. Фа. Герасим. Холоҡ. Тархан. Леодр. Дим. Орлоҡ. Әмер. Икар. Сафин. Диван. Отко. Ас. Скво. Ҡороҡ. Хәбиров. Ут. Әмәл.

**Вертикаль буйынса:** Гирлянда. Тереголова. Старшина. Бура. Сырхау. Ҡумта. Көлсә. Дәрес. Кәбисә. Ишмөхәмәтов. Токио. Кинйә. Вал. Бах. Орсоҡ. Осор. Осло. Ҡаҡ. Ҡунаҡ.

## ҠОТЛАЙБЫҘ!



Әсәйебеҙ, өләсәйебеҙ, ҡәйнәбеҙ **Ғәлимова Венера Шәйәхмәт ҡыҙы 65 йәшлек** юбилейын билдәләй. Ул хеҙмәт ветераны, республикабыҙҙың атҡаҙанған башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы. Венера Шәйәхмәт ҡыҙы 35 йылға яҡын ғүмерен балалар уҡытыуға бағышлаған оло йөрәкле, ихлас күңелле, кешелекле, шәп белгес. Беҙгә - өс балаға ғүмер биреп, атайыбыҙ Ринат Сәхей улы менән 43 йылдан ашыу бергә ғүмер итәләр.

Ҡәҙерле кешебеҙ, бөгөн беҙ һиңә ҡарайбыҙ ҙа, һоҡланып бөтә алмайбыҙ. Һин үҙеңә бик күп яҡшы сифаттар туплаған кешеһең: аҡыл, эшлеклелек, мөләйемлек, сослоҡ, изгелек, шаянлыҡ, түҙемлек. Беҙҙең өсөн һин үрнәк! Һинең менән ғорурланабыҙ, бөтә йөрәктән хөрмәт итәбеҙ, ныҡ итеп яратабыҙ, рәхмәтләребеҙҙе еткерәбеҙ. Һау-сәләмәт, оҙон ғүмерле, бәхетле бул, әсәй!

*Ер йөҙөнөң бөтә матурлығын*
*Килә һиңә бүләк итәһе.*
*Донъялағы матур һүҙҙәрҙең*
*Иң йылыһын килә әйтәһе.*
*Ҡотлап һине тыуған көнөң менән,*
*Ниҙәр теләһәк тә аҙ һымаҡ.*
*Ғүмерең оҙон булһын, шатлыҡ менән*
*Гөрләп йәшә матур йыр һымаҡ!*
*Беҙҙең күңел һәр саҡ һиңә*
*Теләй бары изге теләк.*
*Ер йөҙөндә һинән башҡа*
*Бер кем юҡ ҡәҙерлерәк!*

**Ҡотлау менән улың Батыр, киленең Әлиә, ҡыҙҙарың Айгөл һәм Альбина, ейән-ейәнсәрҙәрең.**

* * *

Июль айында тыуған көндәрен билдәләүсе - **Ауырғазы районы** Мораҙым ауылынан Миңлеғәли Ноғоманов, **Күгәрсен районы** Яҡшымбәт ауылынан Зинәтулла Аллағыуатов, **Шишмә районынан** Луиза Яфаева, **Белорет районы** Шығай ауылынан Сәлимә Татлыбаева, **Өфө районы** Шамонино ауылынан Рәйлә Ишкилдина, Сания Исламетдинова, Гөлзиә Йәмилова һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! Барығыҙға ла йәнтән сихәте теләйбеҙ, шатлыҡ-ҡыуаныстарға төрөнөп, һәр килер көндө яҡындарығыҙ менән яҡшы кәйефтә ҡаршылап йәшәгеҙ!

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ЯҢЫ ДАУА ЫСУЛЫ



**Республика клиник онкология үҙәге тамаҡтағы яман шеште дауалауҙың яңы ысулын - микроэндолинаргеаль лазер ҡуллана башланы. Яңылыҡты Рәсәй Һаулыҡ һаҡлау министрлығы юғары баһаланы.**

Башҡортостан Республикаһы һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин "Башинформ"ға "Был шеште тиҙерәк һауыҡтырыуға булышлыҡ итеүсе юғары һөҙөмтәле ысул", тип билдәләй. Уның әйтеүенсә, хирургик алымдың был төрө - операция микроскобы һәм углекислый газ лазерының дөйөм эше. Бындай операциянан һуң трахеостомия һәм операциянан һуңғы осорҙа тукланыу өсөн зонд ҡуйыу кәрәкмәй. Пациенттар көндәлек тормошҡа тиҙерәк әйләнеп ҡайта. Әлеге ваҡытта биш пациентҡа ошондай операция яһалған да инде, уларҙың дауаханала булыу ваҡыты дүрт көн тәшкил иткән. Бындай операция иртә стадияларҙа яман шешкә эшләнә.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1445 һижри йыл.*

| Июль - Август (Мөхәррәм) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 31 (13) дүшәмбе | 3:55 | 5:25 | 13:30 | 18:30 | 21:18 | 22:48 |
| 1 (14) шишәмбе | 3:57 | 5:27 | 13:30 | 18:28 | 21:16 | 22:46 |
| 2 (15) шаршамбы | 3:59 | 5:29 | 13:30 | 18:27 | 21:14 | 22:44 |
| 3 (16) кесе йома | 4:00 | 5:30 | 13:30 | 18:26 | 21:12 | 22:42 |
| 4 (17) йома | 4:02 | 5:32 | 13:30 | 18:25 | 21:10 | 22:40 |
| 5 (18) шәмбе | 4:04 | 5:34 | 13:30 | 18:23 | 21:08 | 22:38 |
| 6 (19) йәкшәмбе | 4:06 | 5:36 | 13:30 | 18:21 | 21:06 | 22:36 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ*

## ӘРЕМ МАЙЫ



Әрем йыйып, быяла банкаға тығыҙлап тултырырға ла өҫтөнә көнбағыш майы ҡойорға. Кәстрүлгә һыу һалып, шунда банканы ултыртып, талғын утта ҡапҡасын ябып, ике сәғәт ҡайнатып алырға кәрәк.

Аҡ әрем йыйығыҙ. Таҙартылмаған (нерафинированный) май ҡулланығыҙ.

Утты һүндергәс, банка шунда һыуынғансы ултырһын. Һунынан майҙы һөҙөп алырға була. Шифалы май әҙер.

Кис ауыртҡан-һыҙлаған урындарға һеңгәнсе ыуып ятһаң, шифаһы ҙур. Арыған-талсыҡҡан аяҡ-ҡулға массаж да яһаһаң, ауыртыу баҫыла.

ИҒТИБАР!

# "БАШҠОРТ АТЫ" БАЙРАМЫНА КИЛЕГЕҘ!

**11 августан 13-нә тиклем Баймаҡ районы Граф күле буйында икенсе тапҡыр "Башҡорт аты" Халыҡ-ара фестивале уҙғарыласаҡ. Ул республика Башлығы Радий Хәбиров башланғысы менән йылҡысылыҡ, ҡымыҙ бешеү һәм һөнәрселек традицияларын һаҡлау һәм үҫтереү, башҡорт тоҡомло аттарҙы үрсетеү һәм популярлаштырыу маҡсатында ойошторола.**



## Ҡыҙыҡ буласаҡмы?

Фестиваль программаһы бик бай. Беренсе көнөндә, 11 август (йома), ат спорты ярыштарының һайлап алыу турҙары уҙғарыла. 12 август (шәмбе) - фестивалдең төп көнө. Был көндә ҡунаҡтар һәм ҡатнашыусылар өсөн үҙәгендә башҡорт аты булған күркәм тамашалар ойоштороласаҡ. Улар араһында түбәндәгеләр бар:

- **Бәйге.** Еңеүсегә - автомобиль.
- **"Ауҙарыш"** (һыбай көрәш), **"Ылаҡ"** (командалар уйыны, ҡаршы яҡтың ҡаҙанына "гол" индерергә кәрәк, төп бүләк - миллион һум аҡса) кеүек милли спорт төрҙәре буйынса ярыш. Атты менгегә өйрәтеүселәрҙең **"Тай-тулаҡ"** чемпионаты, һыбай уҡ атыу.
- Төрлө тоҡом аттары күргәҙмәһе.
- Ҡымыҙфестта республиканың ҡымыҙ етештереүселәре иң оҫта ҡымыҙсы исемен алыу өсөн ярыша, ә ҡунаҡтар данлыҡлы башҡорт ҡымыҙынан ауыҙ итеп ҡарай ала.
- 11 август кисендә фестиваль ҡунаҡтары өсөн башҡорт эстрадаһы йондоҙҙары һәм саҡырылған артистар матур мәҙәни сара әҙерләй.
- "Йылҡы малы тоҡомон үрсетеү һәм йылҡысылыҡ продукцияһын эшкәртеү мәсьәләләре" Бөтә Рәсәй ғилми-ғәмәли конференцияһы була. Унда Дағстан, Ҡаҙағстан, Тажикстан, Әзербайжан илдәренән, Ҡырым, Ҡырғыҙ, Чечен республикаларынан һәм башҡа төбәктәрҙән сығыш яһаусылар көтөлә.

Фестивалдең тулы программаһы менән уның рәсми сайтын асып танышырға мөмкин. Бөтә ҡатнашыусылар өсөн сауҙа итеү, йәмәғәт туҡланыуы урындары һәм бушлай туҡталҡалар булдырыласаҡ.

## Балаларға ҡыҙыҡмы?

Фестиваль сиктәрендә балалар өсөн интерактив уйындар ойоштороla, Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театрының спектакле күрһәтелә, **"Суҡмар ырғытыу"**, **"Таш күтәреү"**, **"Тартыш"**, **"Таяҡ тартыу"**, **"Көрәш"**, **"Ҡымыҙ миле"** йүгереүселәр ярышы, **"Тарт-эт"** кеүек милли уйындар һәм спорт ярыштары ла буласаҡ.

## Ҡайһы юлдан барырға?

Шәхси автомобилегеҙ менән булһағыҙ, түбәндәге юлдар буйлап барырға мөмкин:

- Сәрмән - Баймаҡ: Темәс - Түбә - Иҫән - Грф күле йәки Баймаҡ аша - Граф күле;
- Ира - Магнитогорск: Юлдыбай аша - Баймаҡ - Граф күле;
- Магнитогорск - Ира: Сибай аша - Баймаҡ - Граф күле.

Фестиваль уҙғарылған урындың GPS-координаттары: 52.6493197, 58.3256030, Өфөнән 410 километр алыҫлыҡта. Юл буйында күрһәткестәр ҡуйыласаҡ.

Йәмәғәт транспорты менән юлланған осраҡта, Баймаҡҡа тиклем килеп еткәс, фестиваль уҙғарылған урынға тиклем махсус маршрут автобустарына ултырып барырға мөмкин. Ул ни бары өс километр юл араһында.

## Ҡайҙа йәшәргә була?

Яҡындағы ял базаларында йоҡларға урындар етмәйәсәк! Шуға Баймаҡ ҡалаһы һәм районы, Белорет, Сибай ҡалалары, Белорет һәм Әбйәлил райондары ҡунаҡханаларында туҡтарға мөмкин. Урындарҙы алдан үҙаллы хәстәрләп ҡуйырға кәрәк булыр.

## Бәйгелә нисек ҡатнашырға?

Бәйгелә һәм спорт ярыштарында ҡатнашыу өсөн **bashkort-aty.ru** һылтанмаһы буйлап, фестивалдең рәсми сайтында "Теркәлеү" бүлегендә теркәлеү үтергә кәрәк.

## Һорауҙар булһа, ҡайҙа мөрәжәғәт итергә?

Фестивалгә ҡағылышлы барлыҡ һорауҙар буйынса 112, өҫтәлмә 4 һандары буйынса Республика ситуация үҙәгенә мөрәжәғәт итергә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһе барышында былай тине:

- Был сара башҡорт тоҡомло атҡа бәйләнешле. Йылдан-йыл уның әһәмиәте артыра тейеш. Ваҡыт үтеү менән төбәк-ара фестивалгә әүерелеп тә китер. Ҡалмыҡ, ҡарасай-черкес, татарҙар беҙҙең менән был йүнәлештә һөйләшергә теләй. Түҙемһеҙлек менән көтәбеҙ. Туризм министрлығы аша күберәк кеше килә алһын тип килештек. Урал арьяғының яҡын райондары хакимиәттәре башлыҡтарына халыҡ килеп, сараны күтәрмәләшһен, тип мөрәжәғәт итәм. Был Баймаҡ ҡына түгел, республика фестивале".

Баймаҡ районы хакимиәте башлығы Фәнис Әминев быға яуап итеп, әле әҙерлек эштәре барыуы һәм уңышлы тамамланырын ышаныс менән раҫланы.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ПРЕМИЯ КҮЛӘМЕ АРТА

**Башҡортостан Башлығы Әҙәбиәт, сәнғәт һәм архитектура өлкәһендә Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы күләмен арттырыу тураһындағы указға ҡул ҡуйҙы.**

Быға тиклем премиялар ике йылға бер тапҡыр тапшырыла һәм түләүҙең күләме 500 мең һум тәшкил итә ине. 2024 йылдан башлап премияны йыл һайын тапшырыу ҡарала. Премияның һәр береһе 1-әр миллион һум күләмендә буласаҡ.

Премиялар йәмәғәтселектә танылыу алған һәм Башҡортостандың художество мәҙәниәтенә тос өлөш индергән иң оҫта башҡарылған һәм иң үҙенсәлекле әҙәбиәт, сәнғәт һәм архитектура әҫәрҙәре өсөн тапшырыла. Премияға дәғүә итеүсегә түбәндәге документтар тапшырырға кәрәк:

- ойошманың премияға дәғүә итеүгә юлламаһы (үҙ-үҙен күрһәткәндәргә - автор (авторҙар) юлламаһы);
- үҙ-үҙен күрһәтеү осраҡтарынан тыш, премияға дәғүә итеүгә авторҙы (авторҙарҙы) күрһәтеү тураһында ойошманың коллегиаль органы ултырышы протоколынан күсермә;
- әҫәр авторы (авторҙары) тураһында мәғлүмәт;
- әҫәр авторынан (авторҙарҙан) шәхси мәғлүмәттәрҙе эшкәртеүгә ризалыҡ;
- әҫәрҙең тасуирламаһы;
- әҫәрҙең аннотацияһы.

Шулай уҡ киң мәғлүмәт сараларында әҫәр хаҡында фекер алышыуҙар тураһындағы материалдарҙы һәм әҫәр хаҡында баһаламаны (булған осраҡта) беркетергә мөмкин.

Документтарҙы түбәндәге адрес буйынса ебәрергә: 450015, Өфө ҡалаһы, Революция урамы, 18-се йорт, Башҡортостан Республикаһының Мәҙәниәт министрлығы, 16-сы бүлмә. Конкурста ҡатнашыуға рөхсәт алған әҫәрҙәрҙең исемлеге республиканың киң мәғлүмәт сараларында баҫылып сыға. 8 (347) 280 87 77 телефоны буйынса өҫтәмә мәғлүмәт алырға мөмкин.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ТӘКӘББЕРҘӘН...

## тәңре биҙгән

Үҙең бешермәгән ашҡа бешереүсенән алда ҡашыҡ тыҡма.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Беҙ тормошобоҙҙоң һәр йәше үренә бер нindәй тәжрибәһе булмаған сабыйҙай барып баҫабыҙ.

**(Франсуа де Ларошфуко).**

Кешенән башҡа бар йән эйәләре лә ерҙә йәшәүҙән ләззәт алырға кәрәк икәнде аңлай.

**(Самюэл Батлер).**

Үҙеңдән өлкән ҡатын-ҡыҙҙан тулы өҫтөнлөккә ынтылма.

**(Джон Апдайк).**

Кәңәш ул шундай нимә: аҡыллылар уға мохтаж түгел, ә иҫәрҙәр уны файҙаланмай.

**(Аноним).**

Йәшәү хәрәкәт талап итә.

**(Аристотель).**

Ахмаҡ уйҙар һәр кем башында була, ләкин аҡыллылар уны ҡысҡырып әйтмәй.

**(Вильгельм Буш).**

Гонаһлыларҙың көсө ҡасандыр бер килеп юҡҡа сыға.

**(Владимир Мономах).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер хаким урамда бер фәҡирҙе осратҡан да, уның ямаулы кейеменә, табаны айырылып сыҡҡан аяҡ кейеменә ҡарап, уны йәлләп, шулай тип өндәшкән:**

**- Әй, фәҡир, һиңә бик ныҡ ауырҙыр инде был донъяла йәшәүе...**

**- Эйе, мин ярлымын, ләкин был, мин ауыр йәшәйем, тигәнде аңлатмай әле, - тигән фәҡир кеше. - Ауыр йәшәү - ул барыр юлыңды, ундағы уңайлыҡтарҙы, мөмкинлектәрҙе, көс-көйәтте белеп тә, шул юлдан бармау ул. Ямаулы кейем, табаны аҡтарылған аяҡ кейеме - ул ауыр йәшәү түгел, ул ярлы йәшәүҙе, ул уңайһыҙ ваҡытта тыуыуҙы аңлата. Ҡарағыҙ, үҙҙәренең урманында саҡта маймылдар ағастан-ағасҡа һикерә, дошманынан ҡаса, үҙенә ашар ризыҡ таба ала. Әгәр ҙә ниндәйҙер асыҡ яланға йә ҡыуаҡлыҡҡа барып эләкһә, улар үҙҙәрен ышаныслыһыҙ тота, һикерә, ырғый ҙа алмай. Сөнки улар ғәҙәти булмаған мөхиткә барып эләгә, ә бит бынан ғына улар үҙгәреп китмәйҙәр, шундай уҡ өлгөр һәм көслө булып ҡалалар, ләкин үҙҙәренең мөхитендә булмағас, көстәрен һәм һәләтлектәрен тормошҡа ашыра алмайҙар. Нисек кенә булмаһын, намыҫлы кешегә насар хаким һәм уның мут чиновниктары янында ярлы булмайынса сара юҡ. Ләкин ярлы йәшәү ауыр йәшәү түгел..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 23029

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән ВӘЛИЕВА,
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
28 июль 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3267
Заказ - 1009